*Тамара* ***ҒӘНИЕВА***

# Донъялыр был…*

Эссе

## Тормош һабаҡтары

*…Табандары ерҙә, күңеле күктә,*
*Эй ғәзизһең миңә, милләттәш.*
*Зиһенемә уйҙаш маһир аҡылың,*
*Күңелемә тойғоң теләктәш.*

1987 йылдың йәйендә "Ағиҙел" журналының мөхәррире Булат Рафиҡов редакцияға саҡыртып алды.

— Ни эштәр ҡыйратаһың?

— Шиғырҙар ижад итәм… "Башҡортостан ҡыҙы" журналы өсөн мәҡәләләр яҙам, командировкаларға йөрөйөм. Редакцияға килгән хаттарға яуап яҙыу йонсотобораҡ ебәрҙе. Ваҡ эш. Һөҙөмтәһе аҙ…

— "Ағиҙел"гә эшкә килергә теләгең юҡмы? — Булат ағай сабыр, һүҙҙең тәмен белеп кенә һөйләй торған кеше, миңә бер ниндәй һынауһыҙ, ҡәҙимгесә генә ҡарап ултыра.

— Әлләсе… Бигерәк ҙур журнал. Тарта алырмынмы икән?

— Тартырһың. Иртәгә үк эшкә сыҡ. — Мин ҡаушай төштөм.

— Отпуск алаһы бар…

— Ялдан һуң тура "Ағиҙел"гә кил.

Шуның менән һүҙе лә тамамланды ағайҙың. Дөрөҫөн әйткәндә, мин унан бер аҙ шөрләй инем. Бигерәк етди, сөсөләнеп бармаған Булат ағай әшнәләрсә дуҫлыҡ булдырырлыҡ кеше кеүек күренмәй ине. Хөрмәт итә инем, әлбиттә. Булат ағай — ярайһы киҫкен сәйәси мәсьәләләргә йоғонто яһарлыҡ аҡыллы шәхес. Юғары трибуналарҙан уҡылған русса докладтарҙың авторы ла ул, тиҙәр. Үҙе сәбәләнеп мөнбәрҙәргә атлығып торманы, әммә әйтергә теләгәндәрен ярайһы ҙур дәрәжәле рәсми кешеләр ауыҙынан әйттереүгә өлгәште. Партияның Башҡортостан өлкә комитетында 90-сы йылдарҙа барған ығы-зығыға, диктат, мин-минлек күренештәренә ҡәтғи баһа биргән Әсғәт Мирзаһитовтың сығышы ла Булат Рафиҡов фекеренә ауаздаш ине.

Уның тәҡдименән шаңҡыбыраҡ ҡалһам да, йәшлек бит, ҡанатланып сығып киттем. Ә ниңә? Булдырып булыр ул!

---

* *Аҙағы. Башы 3-сө һанда.*

Ана шунда, республикабыҙҙың иң мәртәбәле журналында, мин, радионан ҡала, иң һәйбәт университеттарымды үттем. Булат Рафиҡовтың үҙе, Йыһат Солтанов, Рәшит Солтангәрәев кеүек шәхестәр менән аралашыу бәхетенә өлгәштем. Нисәмә-нисә арҙаҡлы, талантлы авторҙар менән эш алып барыу, уларҙың күңел һәм зиһен даирәһе менән осрашыу мөмкинлеге асылды. Ҙур компетенциялы, халыҡ араһында хеҙмәттәре менән абруй яулаған коллектив мине эшкә өйрәтте. Ҡара эш ине ул. Редакцияға иртәгә үк журнал биттәренә сығарып ебәрерлек материал килмәй. Публицистика бүлегенә мәҡәләләрҙе башлыса русса яҙып килтерәләр. Уларҙы журналда баҫтырыр өсөн кире күсереп башҡортса яҙырға тура килә. Ул саҡта компьютерҙар юҡ. 60—70 битлек машинкала баҫылған йә ҡулдан яҙылған материалды күсереп яҙа-яҙа ҡулдар ҡалйып киткән саҡтар була ине. Башҡортсаға тәржемә итеп күсереп яҙғандан һуң уны машинкала баҫтырып алаһың, унан һуң киренән уҡып, грамматик хаталарын төҙәтәһең, корректура ла һинең алдыңа килеп ята. Ҡыҫҡаһы, конвейерға һалынған өҙлөкһөҙ эш. Ә башыңда киләһе һандың йөкмәткеһе, уның өсөн әҙерләнәсәк мәҡәләнең ҡараламаһы өҫтөндәге яңы эш.

Булат Рафиҡов берәүҙе лә кабинеттар буйлап йөрөп күҙәтмәй ине. Белә, редакцияла үҙ эшен еренә еткереп башҡарырлыҡ етди кешеләр йыйылған. Уның төп бурысы — йөкмәтке. Темалар төрлөлөгө һәм уларҙың уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырыр мәғлүмәте. Беҙ Рәшит Солтангәрәев менән көн һайын иртәнсәк баш мөхәррир кабинетына юлланабыҙ. Унда гәзиттәр өйөлөп ята. Өсәүләшеп алмашлап гәзиттәр уҡыйбыҙ, шунан ундағы мәғлүмәт, илдә барған ваҡиғалар хаҡында фекер алышабыҙ. Мин дә һүҙгә ҡушылып киткән булам, күберәген тыңлайым. Һәм нәҡ ана шундай көндәлек “летучка” мине донъяға битараф булмаҫҡа, ил-ватан, сәйәсәт менән ҡыҙыҡһынырға, байтаҡ нәмәләрҙең айышына мөнәсәбәт формалаштырырға өйрәтте лә инде. Шундай мәлдәрҙә авторҙарыбыҙҙың әҫәрҙәрен баһаларға, кемдең нимәгә һәләтле булыуын аңларға ла өйрәнелде. Әйткәндәй, Рәшит ағайҙың бер ғәҙәте бар ине. Алдына килеп ятҡан әҫәрҙе ул авторына ҡарап баһалай. Сөнки авторҙың нимәгә һәләтле икәнен ул үҙләштергән инде. Йыш ҡына кәйефе ҡырыла. Баш мөхәрриргә, үҙе әйтмешләй, Заһриевичҡа, уҡып та тормаҫтан, әҫәрҙе кире ҡағыу фекерен әйтә. Заһриевич уның менән бәхәскә инмәй, ҡағыҙҙарҙы миңә тоттора: әҙерлә! Проза бүлеге аша үтәһе әҫәрҙәр, шул рәүешле, минең елкәгә төшә. Ағайҙар бит, ҡаршылашып булмай. Йыһат Солтанов ағайҙың ҙур көсөргәнеш талап иткән ҡатмарлы фекер һәм йөкмәткенән торған эсселарын да миңә әҙерләргә тура килде. Уның ҡарауы, ни тиклем мәғлүмәт бирҙе улар миңә!

Ә ауылдар тарихына ҡағылышлы мәҡәләләр? Арҙаҡлы Әнүәр Әсфәндиәровтың архивта ҡаҙыныуҙары һөҙөмтәһендә яҙылған, ауылдар тарихы хаҡындағы беҙ бығаса белеп еткермәгән үтә лә ҡиммәтле, мәғлүмәткә бай мәҡәләләренең “Ағиҙел” биттәрендә донъя күреүе халыҡты үҙ нәҫеле, тыуған төйәге хаҡында эҙләнеүҙәргә әйҙәне. Райондарҙа, ауылдарҙа ла яҙмышыбыҙ һәм тарихыбыҙға битараф булмағандар етерлек. Уларҙың тикшеренеүҙәре һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән мәҡәләләр ҙә яуа башланы редакцияға. Билдәле инде, авторҙары нисек кенә энтузиаст булмаһын, республиканың абруйлы матбуғат баҫмаһы биттәренә тота килеп бирерлек мәҡәләләр юҡ. Әлеге лә баяғы, фекерҙе үҙгәртмәй генә ул материалдарҙы йәнә күсереп ултырырға тура килә. Халыҡтың ошондай эҙләнеүҙәре нигеҙендә йылдар үткәс “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!” тигән са-

ралар барлыҡҡа килде һәм ул күренеш, һабантуйҙар кеүек, милли традицияға әүерелде.

Шаһитлыҡ итә алам, республиканың байтаҡ ҡына кадрҙар мәсьәләләре “Ағиҙел” журналының баш мөхәррире фекеренә таянып хәл ителде. Башҡортостан хөкүмәтенең гуманитар бүлегенә кеше кәрәк булғас, беҙ 90-сы йылдарҙа “Мәрхәмәт” хәйриә ойошмаһы етәксеһе булып эшләгән, уға тиклем партияның Киров районы комитеты секретары вазифаһында булдыҡлылығын танытҡан Рәшиҙә Солтанованы тәҡдим итергә тигән ҡарарға килдек. Һәм шулай хәл ителде лә. Ҡайһы бер райондарға башлыҡ һайлау ҙа ул саҡ шул рәүешлерәк килеп сыҡты.

Булат ағай Динис Бүләковты ярата ине. Хәйер, һөйкөмлө, кешелек сифаттары камил әҙипте, Яҙыусылар союзы рәйесен яратмаған кеше булдымы икән? Һәйбәт кеше ине Динис ағай. Башҡорт әҙәбиәтенең генә түгел, башҡорт иленең алтын бағанаһы гөрсләп тигәндәй ауыуы әҙәби даирәлә лә, йәмәғәтселектә лә ярайһы ныҡ һиҙҙерҙе үҙен. Кешеләрҙе булдыҡлылығы аша һанлай, баһалай белгән Динис Бүләковтан миңә яҡты иҫтәлек ҡалды — 1993 йылда “Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре” тигән исем бирелде.

Әҙәби хеҙмәт, редакциялағы эштәр, журналды таратыу буйынса командировкалар шул тиклем арыта ине. Мин йыш ҡына үҙемде елдереп барған поездың артынан йүгереп, ҡыуып етергә маташҡан кеше шикелле хис итә башланым. Йүгерәм дә йүгерәм, тын быуыла. Ә кемдәрҙер машиналары, аттарына ултырып, уҙа ла уҙа... Тиҫтә йылдар буйы бер ниндәй мораль стимулға ла лайыҡ булған юҡ. Киреһенсә, һис ғәйепһеҙгә уйҙырмалар уйлап сығарып, ҡанымды ҡарайтыусылар, ҡыйралырымды көсәүселәрҙең мәкере көсәйгәндән-көсәйә. Түҙергә, түҙергә, эш менән баҫылырға тырышам. Бөтә тапҡан-таянғанымды, һуҡыр сысҡан кеүек, тегеләй бүләм, былай тартам. Фатир һатып алыр өсөн аҡса туплайым. Фәнил мырҙамдан ҡалған балаларға ла өлөш сығарырға мәжбүрмен. Ижад итәм, мәҡәләләр баҫтырам, тәржемә менән шөғөлләнәм. Ләкин ныҡ бирештерә...

Рәшит Солтангәрәев ағай иҫкә төшкәс, яҙмышымдағы бер ҡыҙыҡлы ваҡиғаны ла һөйләп китәйем. Рәшит ағай Башҡортостан Яҙыусылар союзында Йәштәр менән эшләү комиссияһы рәйесе ине. Мин дә йәш шағирмын ул саҡ. Көндәрҙән бер көндө Рәшит ағай радио редакцияһына шылтыратты:

— Союзға инеп сыҡ әле! — Рәшит ағайҙың тауышы уҫал кеүек... Шөрләй төштөм. Ул мине бик үк өнәп тә бөтмәй шикелле. Барып индем.

— Нишләп эш боҙоп йөрөйһөң? — тип йәнә лә ҡырыҫыраҡ ҡаршы алды ул мине.

— Нисек инде?

— Китап нәшриәтенә барып нимәләр ҡыландың?

— Юҡсы...

— Китабымды сығарығыҙ тип, өҫтәлгә ике ярты ултыртҡанһың.

...Булды шул ундай хәл. “Осрашырбыҙ әле” тип исемләнгән бер табаҡлыҡ (700 юл шиғыр) китабым 1980 йылда “Йәйғор” тигән дөйөм ҡыйыҡ аҫтында донъя күргәйне. Тәүге китапты ҡулға алыу бәхетенең ни самалы булыуын үҙе яҙышҡан кеше генә белә ул. Һуңынан аңланым, бөтә китаптарың да ғәзиз була икән. Әммә тәүгеһе!.. Һөйләп тә аңлатырлыҡ түгел ине ул саҡтағы шатлыҡлы кисерештәрем ғәләмәтен. Берәй заман яҙыусы булып китермен тигән хыял бөтөнләй юҡ. Дөрөҫөрәге, һирәк осраған үтә үҙенсәлекле һөнәрҙең яҙмышыңа

әүерелерен күңелеңә һәм зиһенеңә индереү ҙә ҡурҡыныс. Әммә йәшлек әйҙәүе менән тиерлек яҙғандарыңдың ташҡа баҫылып сығыуы — беләгеңә тәүге баланды һалғандары һәм шуның илерткес тәьҫораттары менән бәрәбәр.

Мин 29 йәшкә тиклем Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларында йәшәнем. Ни әйтһәң дә, провинция бит инде. Өфөнөң әҙәби даирәһендәге ҡанундар, мөнәсәбәттәр үҙенсәлеген аңлауҙан бик алыҫ инем. Бер ниндәй таяныс, арҡа терәрлек таяу булмауға ла иҫ китеп бармай. Тырышып эшләһәм, донъям да, яҙмышым да яйға һалынасаҡ, тип өмөтләнәм.

Ишетеп ҡалдым: китабың донъя күрһә, дуҫтарың менән генә түгел, уны сығарыуға көс һалған нәшриәт хеҙмәткәрҙәре менән дә “йыуаһың” икән. Ҡустәнәс алдым да киттем Совет майҙанында урынлашҡан китап нәшриәтенә. Ҡыҫыҡ ҡына бүлмәлә бер нисә кеше ултыра. Елтерәп барып индем дә, сумкамды өҫтәлгә ҡуйҙым:

— Ҡитабымды сығарғанығыҙ өсөн рәхмәт йөҙөнән...

Иң төптәге өҫтәл артында ултырған ағайҙың күҙе шар булды.

— Был ниндәй эш?

Мин тертләберәк киттем.

— Ул ниндәй китап йыуыу ти рәсми урында? Ҡәрәкмәй! — Бүлек мөхәррире ысынтылап асыуланғанға оҡшай. Бүтәндәргә ҡараһам, улары алдындағы ҡағыҙҙарға эйелгән. Нишләргә миңә хәҙер? Ике-өс секунд уҡытыусыһынан шелтә алған хулиган кеүек баҫып торҙом да... йүгереп сыҡтым да киттем. Ҡустәнәстәр ҡалды...

Булды шул ундай хәл. Тик, валлаһи тим, китабымды сығарығыҙ тип түгел, шатлығымды уртаҡлашыу ниәтенән барғайным. Ҡитапты яҙыу ғына бурыс, уны үҙ сираты менән донъяға сығаралар, тигән фекерҙә инем.

Иҫкә төшөрҙөм дә көлөп ҡуйҙым. Бигерәк тә ҡатмарлы был донъя, ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс ваҡиғалар аша таный бәндә йәшәйеште. Яңылышлыҡтарҙан һабаҡ ала тора, яңы түмгәктәргә эләгеп абына тора. Күп бешерҙем мин ауыҙымды. Күбеһе алйотлоҡтан да түгел (ундайҙары ла булды), йәшәүҙең туҙға яҙылмаған ҡанун-ҡағиҙәләрен төшөнөп бөтмәүҙән килеп сыҡты. Ундай һынауҙарҙы оҫталыҡ менән, имгәнмәй генә үтеп сығыусылар ҙа була.

Рәшит ағайға хәл-ваҡиғаның ысынын һөйләп бирҙем. Ышанған кеүек булды, көлөп ҡуйҙы.

...Булат Рафиҡов менән Рәшит Солтангәрәев ағайҙар, һин дә мин эшләп йөрөгән ерҙәренән, бер-бер артлы киттеләр ҙә барҙылар. Әнейемдең вафатынан һуң кисергән сараһыҙлыҡ һәм йәтимлек тойғоһо яңынан уратып алды. Их, тере саҡтарында улар мәңгелектер, тип уйлайбыҙ шул. Бар саҡтарында арҡаң да таяныулы, һорауҙарыңа, икеләнеүҙәреңә яуаптар, кәңәштәр ҙә ана ғына тора кеүек, юғалтҡас, уларҙың яҙмышыңдағы урынын төшөнөүҙән һыҙланыу һәм юҡһыныуҙар бигерәк тә ауыр була икән шул.

Шәхес дәүмәле уның иле, милләте яҙмышына мөнәсәбәте менән баһаланалыр ул. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында “Урал” халыҡ үҙәгенә тупланған милләттәштәребеҙҙең фиҙакәр һәм талымһыҙ эшмәкәрлеге хаҡында алдараҡ һөйләй биреп ҡуйғайным инде. Был осорҙағы ана шул тупланғанлыҡ байтаҡ кешеләрҙең күңел һәм зиһен даирәһенең, милли үҙаңының ни рәүешле булыуын асыу мөмкинлеген бирҙе. Улар башлыса журнал редакцияһында йыйылышыр булды. Мин былай ҙа ныҡ хөрмәт иткән халҡымдың аҫыл заттары менән аралашыуҙан, уларҙың фекерен тыңлау, эшмәкәрлегенә ҡулалмаш булыуҙан ҙур

кинәнес, ғорурлыҡ тойғоларын кисерҙем. Ултырыштарҙа барған һөйләшеүҙәр минең күңел офоҡтарымды байтаҡҡа киңәйтте.

Бер осор Булат Рафиҡов инициативаһы менән ырыуҙар хәрәкәте йәнләнеп китте. Үҙ ырыуым, ҡыпсаҡтар тарихын өйрәнеп, поэма яҙған минең өсөн был хәрәкәт халҡыбыҙҙың тарихҡа мөнәсәбәтен тәрәнәйтер, тигән фекерҙә инем. Ул саҡ “Ҡыпсаҡтар” поэмаһын яҙғайным инде. Ошо күләмле әҫәрҙе яҙырға йөрьәт иткәндә, миңә ни бары 37 йәш ине.

Ырыуҙар хәрәкәтенә ҡаршылыҡ күрһәтеүселәр аҙ булманы. Ул халыҡты тәүге община мөнәсәбәттәре шырлығына һөйрәй, ырыуҙарға бүлгеләү берҙәмлегебеҙҙе тарҡатасаҡ, тиеүселәр булды. Ултырыштарҙың береһендә миңә идеяны яҡларға, уның халҡыбыҙҙың үҙаңын күтәреүҙә, тарихыбыҙҙы барлауҙа һәйбәт сара буласағын иҫбатлап сығыш яһарға тура килде. Һуңыраҡ, ырыуҙарыбыҙ барланғас, кемдең кемлеген асыҡлаясаҡ шәжәрәләр менән ҡыҙыҡһыныу, үҙенең ниндәй милләттән икәнлеген онотҡан ҡайһы бер башҡорттарҙың ана шул өлкәлә ҡаҙыныуҙарынан барлыҡҡа килгән асыштар байтаҡ аҡ таптарҙы асыҡларға булышты. Тарихсы Салауат Хәмиҙуллиндың тапшырыуҙарын ҡарау ғына ла ни тиклем тарихи дөрөҫлөктө аса. Ә Шәжәрә байрамдарына килгәндә, уларҙың киң билдәлелек яулауында республикабыҙҙың тәүге президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың да алдан күреүсәнлеге, өҫтөнлөктәрҙе айыра белеү һәләте лә бик ҙур.

Күп эшләй ине Булат Рафиҡов менән Рәшит Солтангәрәев. Проза әҫәрҙәре, мәҡәләләр яҙыу, телевидение, радио аша сығыштар яһау уларҙың бурыс дәрәжәһенә еткерелгән эшмәкәрлеге булды.

Ул осор тураһында уйланғанда, хәтеремде өйкәп ҡуйған бер ваҡиға хаҡында ла телгә алмай булдыра алмайым.

Ҡапиталистарҙың яңы ғына аҡса эшләй башлаған, аҡсалы булыу сәбәпле үҙҙәрен бик аҡыллы һанағаныраҡ ваҡыты. Хөкүмәт журналистарҙан шундай йүнселдәр хаҡында күберәк һөйләүҙе талап итә. “Халыҡ үҙ йүнен күрергә, үҙ-үҙен тәьмин итергә өйрәнһен, капитализм төҙөүселәр кәрәк!” Николай Швецов тигән кешенең пресс-конференцияһында ҡатнашҡайным. Нисек аҡса эшләүе, тормошта был юҫыҡта мөмкинлектәр күп булыуы хаҡында мауыҡтырғыс итеп һөйләй. Уны тыңлағанда ысынлап та капитализм шәп формация булып күренә башлай. Юрист һөнәрле Швецов яҡшы оратор. Уның сығышынан һуң аудитория тын ҡалды. “Һорауҙарығыҙ бармы?” Өндәшмәйҙәр. Мин авантюраға барып һорайһы иттем: ”Ярар, һеҙҙең аҡсағыҙ күп, беҙ, журналистар, хәйерселеккә төшөп бөттөк, яҡшы тәжрибәгеҙҙе маҡтап мәҡәлә яҙған өсөн һеҙҙең тарафтан берәр стимул булырмы?” — “Һеҙгә, шәхсән бына һеҙгә мин машина бүләк итәсәкмен!”

Кем ышанһын инде ундай вәғәҙәгә. Редакцияла был ваҡиға хаҡында Булат ағайға көлә-көлә һөйләнем дә мәҡәлә яҙып, номерға тапшырҙым. Ә баш мөхәррир, мәҡәлә баҫылып сыҡҡан журналды папкаһына һалып, “Надежда” төҙөлөш компанияһының офисына китте. Һөҙөмтәлә Швецов беҙҙең редакцияға матди ярҙам күрһәтте. Шул аҡсаға беҙ республика халҡына бушлай журналдар яҙҙырҙыҡ. Хәтеремдә, бер мин генә лә 100 кешенең адресына квитанция тултырҙым.

...Иртәрәк китеп барҙы һуғыш михнәттәрен кисергән, тормоштоң ҡәҙерен белгән, милләтенә тоғро был яҡшы ағайҙар. Бөгөнгө байтаҡ ҡыйыш-мыйыш хәл-ваҡиғаларға улар, моғайын, юл ҡуймаҫ ине...

## Рәхмәт яуғырҙары

*...Ҡыйыҡтарҙан йүгереп төштө елдәр,*
*Осратҡандай иҫке танышын.*
*Йән-фарманһа елгән Ваҡыт менән*
*Уйламаһан-юрамаһан ерҙән,*
*Йәрәшмәгән килеш ҡауыштыҡ.*

Халҡыбыҙҙың талантлы шәхестәренең береһе, яҙыусы Баязит Бикбай заманы һәм замандаштары хаҡындағы иҫтәлектәрендә шағир дуҫтарын “цехташтар” тип атай. Дуҫтары ла хаттарында уға: “Һаумы, әҙәбиәт заводындағы цехташ”, — тип мөрәжәғәт итәләр. Мин дә “әҙәбиәт заводына” яйлап ерегә барҙым, үҙ илһамдаштарым, ҡәләмдәш “цехташтарым” күбәйә барҙы. Шуларҙың береһе — Факиһа Туғыҙбаева.

Салауат педучилищеһында уҡығанда төркөмөбөҙҙөң старостаһы Римма Миңлеғолова (ул Бүздәк районының Ҡаңлы-Төркәй ауылынан ине) үҙенең Факиһа Туғыҙбаева исемле класташының да шиғырҙар яҙыуын әйткәйне. Ул әле мәктәптә уҡый, киләһе йыл бәлки бында уҡырға килер, тип һөйләгәйне. Мин Факиһаға хат яҙып ебәрҙем. Ул бер нисә шиғырын ебәрҙе һәм беҙҙең танышлыҡ ана шулай 60-сы йылдарҙа уҡ башланып китте. Ҡап-ҡара ғына сәсенә ап-аҡ бантик таҡҡан, мәктәп формаһы кейгән фотоһын ебәрҙе. Мин уны әле лә һаҡлайым. Әммә Факиһа урта мәктәпте тамамлағас, мин уны нисек кенә Салауатта көтһәм дә, унда килмәне, Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инде. Ә БДУ иҫ киткес шәп профессионалдар әҙерләй торған мәртәбәле “кадрҙар тимерлеге” бит инде. Байтаҡ йылдар хат алышыу туҡтатылһа ла, йәшлек әхирәтем һәм ҡәләмдәшемдең ижадын күҙәтеп торҙом. Университетты тамамлағас, Факиһа Өфөлә эшкә ҡалды. Мин иһә Стәрлетамаҡ педагогия институтында уҡыуымды дауам иттем. Ә инде бер нисә йылдан Өфөлә “Ленинсы — Ленинец” гәзитендә эшләй башлағас, беҙ Факиһа менән яҡындан-яҡын аралашып киттек. “Матбуғат йорто”ноң оҙон коридорҙары осондағы тәҙрә төбөнә ултырып, бер-беребеҙгә шиғырҙар уҡышыу көндәлек ғәҙәткә әүерелде. Тәүге китаптарыбыҙ ҙа бер үк ҡыйыҡта донъя күрҙе.

Мин йәштән үк кешеләр ижадына ҡарата рецензиялар яҙыу менән мауыҡтым һәм әҙәбиәт хаҡындағы мәҡәләләремдең уртаһында Факиһа Туғыҙбаева ижадына хөрмәтле ҡарашымды белдерер булдым. Уның артабан башҡорт әҙәбиәтенең төп йөк аттарының береһенә әүерелә барыуы торғаны бер мәртәбә ине ул. Фекерле, уйсан Факиһа Туғыҙбаева ҙур-ҙур поэмалар, балалар өсөн әҫәрҙәр ижад итте. “Ағиҙел” журналы хеҙмәткәрҙәре һәм баш мөхәрриребеҙ Булат Рафиҡов ярҙамында иң бәләкәй балаларға тәғәйен “Аҡбуҙат” журналын ойоштороуҙа һәм уның етәксеһе булды, ҙур дәрәжәләргә, наградаларға өлгәште. Шағирәнең ижады “Башҡортостандың халыҡ шағиры” тигән исем, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы менән хаҡлы баһаланды.

Икенсе рухташым Аҫылғужа Баһуманов ине. Аҫылғужа уҡымышлы, фекерле шәхес булды. Заманыбыҙҙың иң яуаплы бурыстарын башҡарҙы ул. “Совет Башҡортостаны” гәзитендә эшләне, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы секретары булды, “Китап” нәшриәтенең баш мөхәррире, директоры вазифаһында байтаҡ яҡшы эштәр башҡарҙы.

“Һәүрек!” — Аҫылғужаның яратҡан һүҙе ошо ине. Әрләшкеһе килһә лә, маҡтағыһы килһә лә шулай тиер булды. Уның менән һөйләшеүе үҙе бер ғүмер. Беҙ икебеҙ ҙә эмоциональ кешеләр. Һөйләшә башлаһаҡ, байтаҡ темаларға төшөп китәбеҙ. Ситтән ҡарап торған кешегә ҡыҙып-ҡыҙып фекер алышыуҙарыбыҙ, ҡул һелтәшеүҙәребеҙ, тондарҙың юғары ноталарға өлгәшеүе үҙ-ара талашҡан кеүек күренеүе лә ихтимал ине. Әммә Аҫылғужа, нисек кенә үҙһүҙле булмаһын, бүтән кешене рәнйетерлек итеп бәхәсләшмәй. Берәй инанған фекерен иҫбатлар алдынан уң ҡулын юғарыға күтәрә лә, бысаҡ менән май телгәндәге кеүек, ҡырҡа ғына, һауаны урталай телеп, аҫҡа төшөрә. Был уның “Әйттем-бөттөм, мин хаҡлы!” тигәнен аңлата. Ундай киҫкенлек менән ризалашмай сәбәләнеүҙең файҙаһы юҡ, һәм асылда ул барыбер хаҡлы булып сыға.

Флорид Бүләков менән журналистикаға саҡ аяҡ баҫҡан осоромда, “Ленинсы” — “Ленинец” гәзите редакцияһында эшләгән ваҡытта танышҡайным. Бик егәрле, ижади фекерле Флорид менән беҙ рухташ ҡәләмдәштәр, дуҫтар булып киттек. Талантлы кеше ине ул. Бынамын тигән музыкант, журналист Флорид Бүләков драматургия менән ныҡлап ҡыҙыҡһынып китте һәм уның пьесалары Рәсәй, Башҡортостан театрҙары сәхнәләренә күтәрелде. Рәсәй Федерацияһының Дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы исемдәре бирелде. Беҙ уның менән сәғәттәр буйы телефондан һөйләшер, күп нәмәләр хаҡында етди фекер алышыр, ҡайһы бер нәмәләрҙән рәхәтләнеп көлөшөр булдыҡ. Иртә, бик иртә китеп барҙы Флорид дуҫым яҡты донъянан. Эсемде бушатырлыҡ кешем бар ине. Иҫемә төшә, һағындыра...

Рәлиф Ҡинйәбаев менән йыш аралашам. “Башҡортостан” гәзитенең баш мөхәррире булған сағында ул миңә ышанып байтаҡ етди темаларға мәҡәләләр яҙырға заказдар бирә ине. Яҙғандарыма һоҡлана белде. Көйләп-сөйләп маҡтап та ебәргеләне. Күңелде үҫтерә белде. Шуға ла мин уның үҙен дә хөрмәт итәм. Донъяға ҡарашыбыҙҙың оҡшашлығы, кешеләргә ҡарата аяулы мөнәсәбәт яҡлы булыуыбыҙ ҙа уртаҡ фекерле күңелдәшлеккә этәрҙе. Әле лә ул йыш ҡына хәлемде белешеп шылтырата, өйөң йылымы, ризығың бармы, тип тә һораша. Һуңғы йылдарҙағы ижады — драматургия жанрын үҙләштереп алыуы ла миңә бик оҡшай. Ир-ат фекерен белгем килгәндә, мотлаҡ унан һорашам.

Шундай уҡ уйсан һәм аҡыллы дуҫтарымдың береһе — Ҡамил Йыһаншин. Башҡорт әҙәбиәтенә өр-яңы темалар индергән Ҡамил Йыһаншиндың прозаһын мин ҡулым ҡысығандан тәржемә итеп ултырманым, яҙғандарының башҡорт уҡыусыларына ла барып етеүен теләнем. Мажараларға, сергә тулы тайга, унда йәшәүселәрҙең беҙгә таныш булмаған йәшәү мөхите, инаныстары минең өсөн торғаны бер асыш булды, әҙәбиәт һөйөүселәр ҙә уны ҡыҙыҡһынып ҡабул иткәндер. Тормошта ла бик самими, аҡыллы Ҡамил Йыһаншин менән беҙ ике даирә кешеһе. Әммә мәҙәниәтебеҙ, рухи инаныстар, әҙәбиәткә мөнәсәбәттәребеҙ оҡшаш. Тайганың флора, фаунаһын энәнән ебенә тиклем белеүсе Ҡамил Йыһаншиндың образдары мине һоҡландыра, эстетик зауыҡҡа әйҙәй.

...Яҙыусылар ҙа, бүтән һөнәр кешеләре кеүек, аралашыу мөхитенә мохтаж. Билдәле ки, кем дә булһа тормошта үҙенең күңеленә яҡҡан, үҙен хөрмәт иткән кешеләр менән аралашыу талабын кисерә. Ҡылғандарыңды ҡабул итәләрме, яҙғандарың йөрәктәргә, зиһендәргә барып етәме? Дөрөҫ, бер генә яҙыусы ла тик яҙыусылыҡ эше менән генә йәшәү бәхетенә эйә була алманы беҙҙең заманда. XX быуат урталары һәм аҙағында әҙәби ижадҡа тотоноусылар бигерәк тә

ҙур мәхрүмлек кисереп йәшәне. Салауат Әбүзәров, Зөлфиә Ханнанова, Дамир Шәрәфетдинов, Гөлназ Ҡотоева, Мөнир Ҡунафин, Лариса Абдуллина, Азамат Юлдашбаев, Рәлис Ураҙғолов кеүек егет-ҡыҙҙар, үҙҙәре тәбиғәттән ни тиклем әүҙем, ижади һәләтле булмаһын, ижадтарының иң сағыу сағы китап баҫтырып сығарыу ауырлашҡан заманаға тура килгәс, оҙаҡ өлгөргән миләш емеше кеүек, үтә ҡыйынлыҡ менән үҙҙәренә исем яуланы. Эйе, уларҙың күбеһе Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһына лайыҡ булды, әммә ижади өлгөргәнлек бит премиялар менән түгел, донъя күргән китаптар, уларҙағы ижади фекер, яңы хистәр тулҡыны менән баһалана.

Күңелем тәбиғәттән ихласлыҡ һәм намыҫ ҡағиҙәләренә буйһонған эскерһеҙлеккә көйләнгән. Мин ябай кешеләрҙе яратам. Һирәк-мирәк баҙарға сыҡһам, ҡул эштәре менән мәшғүл, шуларҙан аҙ-маҙ кәсеп ҡылып маташҡан ҡатын-ҡыҙ менән һөйләшеп китәм. Бала-сағаһы, көнкүреше менән ҡыҙыҡһынам. Уларҙың күбеһе мине таный. Яҙыусы икәнемде беләләр. Ҡыҙыҡһыныуыма яуап итеп, ихласлап хәл-әхүәлен һөйләй. Өфөнөң Аврора урамындағы бәләкәй баҙарҙа шәл, ойоҡбаштар, бирсәткәләр бәйләп һатыусы Светлана, емеш-еләк менән сауҙа итеүсе Фәнзилә, ойоҡбаш-маҙар кеүек кәрәк-яраҡ һатып көн итеүсе Флүрә менән Асия кеүек таныштарым бар. Мин уларға — үҙ хәбәремде, улар миңә үҙҙәренекен тартынмай һөйләй. Ауылдаштарыма оҡшағандар, төп мәртәбәләре — хеҙмәт. Ҡайһы бер ялҡауҙарҙы һәм эскеселәрҙе иҫәпләмәгәндә, беҙҙең ауыл кешеләре ғүмере буйы күкрәк көсө менән көн итә.

Мин йәнә милләтебеҙ мәртәбәһе булырҙай аҡыллы кешеләрҙе яратам. Үҙемдән өлкәндәр хаҡында әйтеп тә тормайым, уларҙың күбеһе минең өсөн идеал булды. Үҙемдән йәшерәк, әммә тәбиғи аҡыл һәм талант менән тыуған, халҡыбыҙҙың бәҫен тотоуҙы бурысы һанаған егет-ҡыҙҙарға һоҡланыуҙан тыйыла алмайым. Шундайҙарҙың береһе — Гөлфиә Янбаева. Идеалдарына тоғро, ныҡыш, егәрле Гөлфиә журналислыҡ хеҙмәте менән дә, "Киске Өфө" гәзитен ойоштороп ебәреүе менән дә күңелемә яҡын. Гәзиттең милли йөҙө, концепцияһы бар.

Әхмәр Үтәбай менән Башҡортостан радиоһында эшләгән осорҙа таныштым. Башта мин был донъяға зәп-зәңгәр күҙҙәре аша тултырып ҡараған үтә романтик егетте ҡабул итеп тә бөтмәгәйнем. Әммә ҡарашы тулы мөхәббәт сайҡалған егеттең тора-бара йәшәүгә философтарса ҡарашын шәйләп, хайран булдым. Яратҡан шағирҙары Рәми Ғарипов, Рауил Бикбай, уҡытыусыһы профессор Вадим Сафин, дуҫтары Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла Зарипов, Марсель Искәндәр, Рәмил Ҡол-Дәүләт — Әхмәр ошо һәм башҡа таланттарға ғашиҡлығын, һоҡланыуын һәм фекерҙәрен йөрәгенең түрендә бәпләй. Минең дә матбуғатта баҫылып сыҡҡан һәр шәлкемемә мөнәсәбәтен белдерә тора. Уның тәбиғи аҡылы һәм Хоҙай Тәғәлә бүләк иткән талантлы йөрәгенә тик яҡшыларға булған мөхәббәт кенә оялаған. Әхмәр яһалмалыҡты, алдаҡты, хыянатты ауыр кисерә торған инсан, уйсан, милләтебеҙҙе гел юғарыға әйҙәүсе фекер эйәһе. Шиғриәтендәге эскерһеҙ һыҙланыуҙар, прозаһындағы тәрән фекерҙәр башҡорт әҙәбиәте юғарылығын билдәләр ҡиммәттәр ул.

Әхмәр — киң эрудициялы, уйсан кеше. Байтаҡ йылдар Башҡортостан радиоһында, телевидениеһында эшләне. Бынамын тигән тапшырыуҙар әҙерләне. Бер осор Силәбе өлкәһенә китеп, ундағы телевидениела ла яҡшы эштәр башҡарҙы. Байтаҡ йылдар "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире урынбаҫары булып хеҙмәт итте, һуңынан "Ағиҙел" журналы редакцияһына күсте. Мәҡәләләр яҙа. Ҡурай тарта, моңло итеп йырлай белә Әхмәр. Ғөмүмән, талант-

лы кешеләрҙең таланты бер яҡлы ғына булмауына күптән төшөнгәнмен. Мин белгән, аралашҡан яҙыусыларҙың күбеһе йырлай. Ҡәтибә Кинйәбулатова, Муса Ғәли, Рафаэль Сафин, Таңсулпан Ғарипова, Сәрүәр Сурина, Ҡәҙим Аралбай, Зөһрә Ҡотлогилдина, Мәүлит Ямалетдинов, Зөбәржәт Йәнбирҙина, Лариса Абдуллина һәм башҡа байтаҡ яҙыусы, шағирҙарҙың йырҙарын тыңлауы үҙе бер ләззәт. Шиғыр рифмаһын һәм ғаләм әйләнеше ритмикаһын яҡшы тойомлаусы был талант эйәләре халҡыбыҙ моңдарына ла һаҡсыл һәм ихтирамлылар.

Рәйес Түләк менән беҙ Рәми Ғарипов шиғырҙарын яттан һөйләү ярышы аша дуҫлаштыҡ. Ул һөйләй, мин һөйләйем. Рәйес кемдәндер еңелеүҙе ғәрлек һанаған егет ине. Рәйес булһын да, уны кемдер уҙып китһен, имеш! Ул ауылдашы Әхмәрҙән ижады менән түгел, донъяға ҡарашы менән айырыла ине. Ә шиғриәте... Башҡорт әҙәбиәтенең этаплы бер күренеше ул.

Тамара менән Хисмәт Юлдашевтарҙың да шиғриәтен яратам. Улар икеһе ике төрлө ижад итеүсе талант эйәләре. Хисмәт башҡорт менталитетының фольклорға тартым даирәләрен шиғриәтле итһә, Тамара иһә ниндәйҙер интеллектуаль тәрәнлектәр эсендә ҡанатын кирҙе. Аҡ менән ҡара түгел был икәүҙең фантазия даирәһе, киреһенсә, мин аңлаған тиклемге талаптарға һалһаң, бер-береһен тулыландырыусы, икәүҙән бер бөтөн барлыҡҡа килтереүсе тандем кеүек. Икеһе ике төрлө, әммә ниндәйҙер уртаҡ камиллыҡ бар улар ижадында. Тормоштоң ҡатын-ҡыҙ менән ир-ат араһына ҡуйған һорауҙарына яуап эҙләйҙәр кеүек. Был хаҡта ентекле генә хеҙмәт яҙырға ла урын бар шикелле. Улай тиһәң, Тамара Искәндәриәнең шиғриәтенә әҙәбиәт ғилеме күҙлегенән анализ биреп булһа ла, Хисмәт Юлдашевтың бер кемдекенә лә оҡшамаған, тик эске интуиция менән яҙылған, әммә күңелде семетепме, тертләтепме китә торған ижадына ҡәҙимге критерийҙар менән ҡарау мөмкин түгелдер. Ул тәбиғәте менән шағир. Ниндәйҙер тәбиғи гармония бар уның әҫәрҙәрендә.

Яратҡан шағирҙарым күп, һанай китһәң, осона сыға алмам. Ғөмүмән, минең уйымса, тотош төрки донъяһында башҡорт әҙәбиәте — Шәреҡ һәм Европа культураларының синтезы ла, тик башҡортҡа ғына хас моң-һағышлы һүҙ сәнғәте лә ул. Башҡорт шиғриәтенең төп ҡаҙанышы — ҡыҙҙар моңо. Ҡатын-ҡыҙ шиғриәте аҡыллы ла, уйсан да, нескә лә булыуы менән халҡыбыҙҙың рух һәм зиһен кимәленең, күңел даирәһенең дәүмәлдәрен мәртәбәле бейеклеккә күтәрҙе лә инде.

Әҙәбиәт менән шөғөлләнеүселәр, алдараҡ әйткәнемсә, күңелен һәм зиһенен эшкә егеп, яңғыҙлыҡта ижад итһә лә, бер ни тиклем эштән бушаған арала кешеләр менән аралашыуға мохтаж була. Халыҡ менән осрашыуҙар, аралашыуҙар ваҡытында ҡағыҙға төшөп бөтмәгән һүҙҙәреңде күҙмә-күҙ еткереү әҙәбиәтсе өсөн бик мөһим. Ә инде фекерҙәштәрең менән үҙ-ара йөрәк утын алышыу бигерәк тә. Бындай аралашыуҙар илһамландыра.

Яҙыусы кеше, хеҙмәт хаҡы алып эшләгән урынында отпуск бирелгәндә лә, шул ваҡыттан файҙаланып, өҫтәл артына ултыра.

Мин ғүмеремдә бер тапҡыр СССР Яҙыусылар союзының “Малеевка” тип аталған ижад йортона барып эләктем. Урман эсендә генә ултырған Ижад йортонда шул тиклем тыныс. Һауаһы һәйбәт, эш шарттары яҡшы. Шарттар тигәс тә, яҙыусыға өҫтәл, ҡағыҙ, ҡәләм һәм аулаҡ булһа, шул еткән. Уның ҡарауы, фекер туплайым тиһәң, рәхәтләнеп уйланып йөрөргә, саңғы шыуырға мөмкин. Мәскәүгә, Рузаға барып, Өфөлә дефицит булған донъя кәрәк-ярағын да алып була. Ә инде илһам сорнап алды иһә — яҙыша бир.

Мәскәүҙекеләр күп. Улар иң уңайлы корпустарҙа йәшәй. Һауалыраҡ ҡыланһалар ҙа, саманан ашмайҙар. Күңел асып йөрөүсе юҡ, һәр кем эш менән мәшғүл. Билдәлерәк яҙыусыларҙың ғаиләләре шым ғына, үҙ яйына ял итә.

Берәүҙәр килә, берәүҙәр китә. Минең өсөн иң һәйбәте — Рафаэль Сафин ағайҙың булыуы. Һәйбәт зауыҡлы шағир, тәртипле, ипле кеше. Марат Кәримов ағай булып китте. Гел бикләнеп кенә ултырыу ҙа мөмкин түгел. Аралашабыҙ. Татарҙар бар. Мине уларҙың береһе лә белмәй, әммә Рафаэль ағай ыңғайына араларында йөрөй бирәм. Татарстанды үҙемдең дә күргәнем юҡ. Шулай ҙа бында эшләп ятҡан Марсель Ғәлиевты, Әхсән Баянды ишетеп беләм. Минең коллега, радиожурналист һәм шағирә Шәмсиә Йыһаншина бар. Һөйкөмлө ҡатын, матур итеп йырлай, шиғырҙары һәйбәт. Нурия Измайлова иһә Башҡортостан ҡыҙы, ул саҡта Мәскәүҙә йәшәй ине. Рафаэль ағай янына ул саҡта СССР-ҙың халыҡ депутаты Туфан Миңнуллин килеп китте. Табын ҡороп, матур итеп һөйләшеп ултырҙыҡ. Аҡыллы, әҙәпле, талантлы драматург Туфан ағай менән ҡорҙаш булыу — үҙе бер ғүмер. Ғәзиз Кашапов бар. Отставкалағы хәрби кеше икән. Хәсән Туфан тураһында роман яҙа. Инфаркт кисергән, аҙыҡты тоҙһоҙ ашай. Уның ҡарауы, күңеле матур. Хәҙер мәрхүм инде. Байтаҡ ваҡыт Яр Саллынан матур-матур хаттар яҙып торҙо. Хаттарын әле лә һаҡлайым.

Мин иһә “Ҡанундар” поэмаһын яҙам. Ниндәйҙер рәхәт кенә илһам солғанышында эшләйем дә эшләйем.

Поэманың ҡаралама варианты ҡағыҙға төшкәс, алтын йомортҡа һалған тауыҡтай булып, уҡып күрһәтеү теләге тыуҙы. Яңы шиғырҙар уҡышыуҙы үҙ-ара “премьера” тип йөрөтәбеҙ. Шулай итеп, ниһайәт, минең дә премьера көнө килеп етте.

...Зәңгәр күктең аҡыҡ көмбәҙенә
Тәгәрәп тә сыҡкас ал ҡояш,
Уйҙарымдың осо һүтелде лә
Тороп ҡалды бары бер ҡолас.
Унынынан үҙем селтәр үрҙем,
Унынһы инде миңә яҙғаны.
Биҙәгендә минең селтәремдең —
Йәшәүемдең шатлыҡ-ғазабы.
Селтәремде элдем ситәндәргә,
Сит йәндәргә булһын иҫтәлек.
Рәхәт кенә йәшәгәндер, тиеп,
Иҫләмәгеҙ мәгәр баштар эйеп,
Был донъянан китһәм үпкәһеҙ.
Өмөтләнәм,
Бер ҡайтырмын кеүек,
Ҡайталмаһам, тимәк, яҙмыштыр.
Уты ҡалыр барыбер сыра хәтлем,
Заманам тип көйгән һағыштың.
...Ҡыйыҡтарҙан йүгереп төштө елдәр
Осраҡандай иҫке танышын.
Йән-фарманға елгән Ваҡыт менән
Уйламаған-юрамаған ерҙән,
Йәрәшмәгән килеш ҡауыштым.

Һуңғы юлдарҙы уҡып бөткәс, тынып ҡалам. Ҡәләмдәштәр ҡул саба. Рафаэль ағай мут йылмайып тик ултыра. Һиҙеп торам, ҡәнәғәт: "Күрҙегеҙме, — йәнәһе, — беҙҙекеләр шулай ул". Әхсән Баян өндәшмәй. Кем нисек кенә яҙһа ла, Әхсән Баянға еткерә алмай бит инде. Бигерәк тә Илештә йәшәгән халыҡтың 80 проценты башҡорт тигән фекеренән ҡайтмаған тиҫкәрерәк башҡорт ҡатынының арыу әҫәр яҙа алыуы — туҙға яҙмаған нәмә.

Бик күп яҡшы һүҙҙәр әйтте миңә ул көн татарҙар ҙа, башҡорттар ҙа. Рәхәт булды. Яҡшы һүҙҙе кем яратмаһын. Поэма — ауыр жанр. Уны йән көсөңдө һалмайынса яҙып булмай. Әҫәрҙең художестволы кимәле лә, образдары ла камил булыуҙан тыш, поэма ярайһы тәрән һәм юғары идеялы, философик фекерле лә булырға тейеш бит. Ниндәйҙер популяр драматик ваҡиғаның сюжетын рифмалап тасуир итеү — поэма яҙыу түгел. Ана шундай хеҙмәтте башҡарып сығып та, бушап ҡалған күңелеңә көнсөл йә талантһыҙ кешеләр услап-услап батҡаҡ тултыра башлаһа, ул батҡаҡтан арынмай тороп, ижадсы күңеле яҡшы әҫәр яҙыуға өлгәшә алмай шул. Малеевкалағылар, рәхмәт яуғырҙары, күңелемде үҫтереп ебәрҙе.

Яуаплылыҡ... Бер ҡасан да күңелемдән юйылмаҫ был тойғо ҡасан килеп ояланы һуң минең йөрәгемә? Яуаплылыҡ тойғоһона кемдәрҙер алдындағы ғәйеп тойғоһо ла һырылды. Белмәйем, кем алдында яуаплы, кем алдында ғәйепле булғанмындыр. Әммә шуныһы хаҡ: был ике тойғо мине ғүмерем буйы эҙәрлекләне. Донъяла барған һәр кире үҙгәреш, халҡымдың кисергән ыҙаһы өсөн яуаплылыҡ кисерҙем һәм халҡыбыҙ алдына ҡуйылған бөтә һынауҙар алдында үҙемде ғәйепле һананым. Был тойғоларҙың нигеҙен дә, сәбәбен дә аңлата алмайым. Ләкин нәҡ ошондай һыҙланыулы кисерештәр минең яҙмышыма әүерелде. Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, халҡыбыҙ алдында бер ниндәй ҙә бурысым юҡ. Депутат түгелмен, шуны эшләрмен, быны ҡайғыртырмын, тип, вәғәҙәләр бирмәнем. Ҡара тиремде түгеп донъя көттөм. Минең өсөн иң ҙур маяҡтар — намыҫ, кеше хаҡына инеп, оятлы һәм гонаһлы булыуҙан ҡурҡыу. Бер кемгә лә аяҡ салманым, интригалар ҡорманым. Эсемде бошорған күренештәр хаҡында дөрөҫөн әйткеләнем, әлбиттә. Әммә дөрөҫлөктән гонаһтан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡыусылар барлығын да беләм.

...Үҙем эссе тип нарыҡлаған был яҙмаларымдың бер өлөшөн "Ватандаш" журналы уҡыусыларына тәҡдим иткәйнем инде. Республикабыҙҙың район, ҡалаларынан шылтыратыусылар күп булды. Улар миңә йәшлегем хәтирәләрендә тасуирланған хәл-ваҡиғаларҙың үҙ яҙмыштарына ауаздаш булыуы, эссеның үҙ яҙмышым хаҡында ғына түгел, тотош быуын яҙмышы хаҡында булыуын белдерҙе. Ҡайһы бер шылтыратыуҙарҙан һуң илап та алдым. Ә әҙәбиәттең рәсми даирәһе, проза тәнҡитселәре, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, үҙ фекерен белдермәне.

...Әле ноябрь айы. 2013 йыл. Быйылғы йыл үтә сәйер булды. Йәй айҙары эҫе килде. Ҡыҫҡа, йылы ямғырҙар яуҙы. Емеш-еләк, йәшелсә ишелеп уңды. Йәй буйы рәхәтләнеп баҡса емештәре ашап йәшәлде. Ҡыҙымдың аҙна һайын тоҡлап ташыған уңыштарынан разый булып, доғаларымды уҡып ултырҙым. Йәйҙе күреп булманы тиерлек. Көс булманы. Фәнүр улымдың туйына тип тә, ныҡ ауырығанда әйтеү әйткән ҡорбанды салдырырға тип тә ауылға ҡайтҡайным, бер аҙыраҡ атайым йортонда тороп китергә лә ниәтем бар ине. Ауыл мунсаһын инһәм, хәлем еңеләйер кеүек тойолғайны. Ҡорбан салдырып булманы. Бер кис кенә ҡунып, кире Өфөгә юлланырға тура килде...

Сентябрь, октябрь буйы ямғыр туҡтаманы. 16 ноябрҙә — 8 градус йылылыҡ. Сәләмәт кеше өсөн йылы көндәр торғаны бер бәхеттер инде. Ҡупме эш эшләп өлгөрөп була. Ауыл малы ла ҡырҙалыр, ҡыш өсөн әҙерләнгән бесәнгә лә бер аҙ экономия. Ҡөтөү көтөүе генә ҡыйындыр. Шуныһы ғәжәп, гел ямғыр яуып торғас, ағастарҙың япраҡтары һарғаймай тиерлек. Ваҡыт үҙенекен итте, йәшел көйө ергә ҡойолоштолар.

Иҫтәлектәрҙе дауам итәйек.

...Малеевкала мин ике ғаилә менән таныштым. Улар икеһе ике корпуста айырым бүлмәләрҙә йәшәй ине. Береһе — әрмән, икенсеһе әзербайжан ғаиләһе. Дөрөҫөрәге, улар — балалары менән Яҙыусыларҙың Ижад йортона килеп һыйынған ҡатындар. Ирҙәре ғаиләләрен Мәскәүҙәге Милләт-ара министрлыҡ ҡапҡаһына етәкләп килтереп тапшырған да, кире ҡайтып киткән. Гражданлыҡ бурыстарын үтәүҙәре. Әзербайжан республикаһының Ҡарабах (“Ҡара баҡса”, “ҡара” — “ҙур” тигән мәғәнәлә, төҫтө аңлатмай; Ҡара диңгеҙ ҙә Черное море тип тәржемә ителгән, асылда Ҙур диңгеҙҙе аңлата) регионы өсөн һуғышалар. Әзербайжан, әрмән ҡасаҡтарын Рәсәй, үҙ халҡы ла аслы-туҡлы йәшәгән 90-сы йылдарҙа, кемеһен ҡайҙа урынлаштырып сыҡҡан. Алты-ете ғаилә әлегә тарҡалып өлгөрмәгән СССР Яҙыусыларының Ижад йортона урынлаштырылған. Ижад йорттары яҙыусыларҙың әҙәбиәт фондтарына түләгән иғәнәһе һәм китап нәшриәттәрендә донъя күргән китап гонорарҙарының бер өлөшөн СССР Әҙәбиәт фондына күсереү иҫәбенә йәшәй ине. Ысынында яҙыусылар элек тә, хәҙер ҙә тик үҙ йөрәге һәм зиһене тыуҙырған продукцияның хаҡына ғүмер итте һәм ғүмер итә. Яҙыусылар киң, йомшаҡ күңелле халыҡ, аңлайҙар — ике милләт тә яҙмыш трагедияһы ҡосағына барып ингән. Улар балаларының ғүмерен ҡурсалай, бер өҫтәл артында булмаһа ла, бер үк ашханала (яҙыусылар иҫәбенә) тамаҡ туйҙырып, милләт-ара барған һуғыштың аҙағын көтә. Мин — СССР яҡшы ил, бөтә милләттәр ҙә тигеҙ тигән инаныста тәрбиәләнгән һәм шуға ихлас ышанған кеше, ләкин үҙ дәүләтселегенә булған ҡайһы бер милләттәрҙең төҫкә-башҡа ла, менталитет яғынан да оҡшаш булыуы сәбәпле, уларҙы бер-береһенән насар айыра инем. Азиаттарҙың да бит шәхси үҙенсәлеген айырыу еңел түгел. Бөтәһе лә бер ҡалып төҫлө. Япондар иһә беҙҙе шулай ҡабул итә икән, рустарҙы бер-береһенән айырыуы үтә ҡыйын, тип әйтәләр, имеш. Шуға ла был ике ғаиләнең, төҫ һыҙаттары ныҡ оҡшаш булыу сәбәпле, ярайһы ваҡыт кемеһенең — әзербайжан, кемеһенең әрмән икәнлеген айыра алмай йонсоном. Улар менән танышып китеүемдең сәбәбе балалар ине. Ҡескәйҙәргә ҡарата йылы мөнәсәбәтем арҡаһында әсәләре менән дә һөйләшеп, яҙмыштары эсенә инеп китергә мәжбүр булдым. Аңлашыла төштө: әзербайжан ҡатыны Айнаның — үҙ хәсрәте һәм үҙ хәҡиҡәте: балалары Айгизә менән Алиҙы тыуған ерҙәре — Ҡара баҡсанан айырылырға мәжбүр иткән әрмән агрессияһын ҡабул итмәүе, хәләл ефете Солтандың яҙмышы менән хәбәрҙар булмауы, ә әрмән ҡатыны Сильва һәм уның ҡыҙы Нани, улы Отари иһә әзербайжандарға ҡаршы һуғышыусы аталары Ҡостаның яҙмышын белә алмай яфалана. Ҡатындарҙың икеһенең дә күҙендә һағыш, әммә бер-береһенә ҡарата нәфрәт юҡ.

Мин, ялым тамамланып, Өфөгә ҡайтҡас та уларҙы һағынып бер булдым. Ике ғаиләгә лә айырым-айырым күстәнәстәр, ойоҡбаш, бейәләйҙәр бәйләп һалып ебәрҙем.

## Ауылда

*Тыуған тупһа — алтын тупһа түгел,*
*Юнып һалған атай ҡулдары.*
*Ошо өйҙөң ошо тупһаһынан*
*Башландылар минең юлдарым.*

Белмәйем, хәҙер инде юҡҡа сыҡҡан Сураҡай, Тимерсе йылғалары арауығын үткән саҡта кем нимә хаҡында уйланалыр, мин иһә һағыштарға биреләм.

Ни өсөнмө? Сәбәбе бар. 1921 йылдың май айында ҡартатайым атаһы Хәмзә хөрмәтенә ҡорбан салдыра, ҡәрсәйем Нәғимә ҡорбан итен ҡаҙанға төшөрә. Ҡөрьән ашына ара кешеләре саҡырылған була. Шул көндө ҡартатайым Ағзамды ауыл сходына саҡыралар. Ҡәрсәйем: “Тиҙ ҡайт, кеше саҡырғанбыҙ, ит бешеп килә”, — тип оҙатып ҡала. Ярар, ти ҡартатайым, ҡаҙандағы ит ҡайҙа китһен, ашарбыҙ, насип итһә. Һәм... Ике сәғәттән ҡартатайымдың ҡанһыраған мәйетен Ғәниевтарҙың ишек алдына килтереп ташлайҙар...

Нишләп, кемдәр үлтерә һуң ҡартатайымды? Ауыл бәләкәй. Бөтәһе лә бер-береһен энәһенән ебенә тиклем белә.

Мин ҡартатайһыҙ үҫтем. Атайым ҡорбандар салыр, һуғым һуйыр ине, берәүгә лә мах бирмәй ғүмер иткән мөһабәт кеше булды. Заманалар үткәс, Мостафа бабай ҡартатайымды кемдәр үлтергәнен һөйләгән.

Аҙаҡ атайым — Фәнил мырҙама, мырҙам — Фруза һылыуыма, ә Фруза һылыуым миңә һөйләне. Шуға ла, бына нисә йылдар инде, ауылыбыҙға яҡын ғына Сураҡай, Тимерсе йылғалары араһын мин һағыштарға бирелеп үтәм.

Атайым менән әнейемдең вафатынан һуң туған тупһабыҙ етемһерәне. Ә мин, ем табырына өмөтләнгән һәм шул ергә үҙе генә белгән юлды һалып алған сысҡан һымаҡ, ем эҙләп түгел, бала сағымдағы, йәшлегемдәге яҡты кисерештәрҙе һағынып, ризыҡ-тәғәм тейәп ҡайтып төшөр булдым. Һағындыра һәм — вәссәләм. Нимә һораһалар, шуны түләргә әҙермен, тик атай тупһаһынан ғына айырмаһындар.

...Ә эскән һыуыбыҙ Наҡаҫ күҙгә күренеп һайыҡты. Йылға тиерлеге лә юҡ, шишмә кеүек кенә ағып ята. Ауылдың ике яғынан Наҡаҫҡа ағып төшкән Йәнәштәр хаҡында әйтәһе лә түгел. Уларҙы һуғарыусы шишмәләргә һан булмағас, ҡороноლар. Ә бит ауылдың ете шишмәһе бар. Уларҙы ҡарап, йыл да тирә-яғын, ҡойоһон таҙартып, серей башлаһа, бураһын алыштырып торорҙар ине. Беҙҙең өйөбөҙгә яҡынын, уны гел ҡарап торған Солтан бабай Байдәүләтов хөрмәтенә, Солтан шишмәһе тип йөрөттөләр. Ауылдың осона һыу башняһы ҡуйып, өйҙәргә һыу индерелгәс (ул эштә минең дә ҡыҫылышым булды), шишмәләрҙең көҙере китте. Солтан шишмәһен һуңғы тапҡыр бынан утыҙ-ҡырҡ йылдар элек үҙ аҡсама егеттәр яллап, бура буратып төшөрткәйнем, текә ярҙан менеп-төшөп йөрөрлөк баҫма һалдырғайным, шунан бирле ҡул тейҙереүсе юҡ. Яры ишелеп, шишмәһе лайлаланып киткән. Субырлап ҡына аҡҡан була әле ул. Һыуы һалҡын, йомшаҡ, сәйгә бигерәк тәмле. Эсем боша ла, нишләйем һуң, йәшерәктәргә мыжып-мыжып алам, тыңлаусы юҡ. Һыуҙың ҡәҙерен бер килеп аңларҙар ҙа, һуң булып ҡуйыуы ихтимал. Әйтәләр бит, 30—50 йылдан илдәр, дәүләттәр нефть өсөн түгел,

һыу өсөн көрәшәсәк. Әле үк телевизорҙан һыуһыҙ интеккән ауылдар хаҡында һөйләйҙәр. Ә беҙҙең ауылда бөгөн көйәнтәләр ҙә юҡ. Ҡилен төшөргәндә Ҡасурын шишмәһенә юл күрһәтәләр. Матур күренеш. Тотош ауыл өсөн йәмле тамашаға әйләнә. Ҡемдеңдер (рәхмәт төшкөрө) тотанаҡлығы арҡаһында һаҡланып ҡалған сәскәле көйәнтәһе йола башҡарыуға хеҙмәт итә.

Ҡасурын буйының матурлығы, ундағы усаҡ янындағы уйындар хаҡында алдараҡ яҙғайным инде. Ә шул матур туғайлыҡҡа бәйле хәтирәләр һаман да, ерҙе тишеп башын күтәргән сәскә һабағы һымаҡ, хәтерем ҡатламдары аша ҡояшҡа ынтыла.

...Ул ваҡиғанан һуң байтаҡ ғүмер үтте. Ниндәйҙер моңло ла, һағышлы ла сер итеп хәтерем төбөндә һаҡланым мин уны. Ваҡытында үтә сәйер һәм көтөлмәгән асыш булып шаңҡытҡан серҙе саҡ эсемә һыйҙырған саҡтарым булды. Ҡемгәлер һөйләгем килде. Тыйылдым. Байтаҡ ваҡыт үткәс, әнейемә һөйләнем. Ә ул, ҡолағына нимә төшһә лә, эсенә һеңдерә белде. Хәҙер инде әнейем дә, мин шаһит булған ваҡиға геройҙары ла (йәндәре йәннәттә булһын) гүр эйәләре.

...Әнейемдең бер туған мырҙаһы Әҙһәм абзыйым ғүмер буйы Урта Азияла йәшәне. Һуғыштан һуң шул яҡтарға сығып китеп урынлашҡан да, өйләнеп, ҙур ғаиләһе менән Үзбәкстандың Ленинабад ҡалаһы тирәһендәге бер ҡасабала ғүмер итте. Һуңыраҡ донъяһын барып күргән туғандарыбыҙ бик һоҡланып һөйләр ине: совхоздың баш бухгалтеры булып эшләй, тормошо етеш, мул йәшәйҙәр. Райондың милиция начальнигы булып та эшләп алған икән. Флүрә, Руслан, Рөстәм, Зилә исемле балалары бар. Еңгәнең исеме Хаят. Ҡәйнәһе лә яндарында. Мин иҫ белгәндә Әҙһәм абзыйым хаҡында туған-тыумаса, алыҫтағы яҡтылыҡ кеүек, хөрмәт менән телгә алыр булды. Күгәрсен районының беҙҙең ауылдан 5 саҡрым ғына аралыҡта ятҡан Дауыт-Ҡайып ауылында йәшәгән өләсәйем Ҡамилаға Азия яғынан йылына бер булһа ла посылка килә. Өрөк, емеш (беҙ йөҙөмдө емеш тибеҙ) ебәрә абзыйым, сәй һала. Туған-ырыу күп беҙҙең. Өләсәйемдең дүрт ҡыҙы — Fәтиә инәйем, Зәйтүнә, Наилә апайымдар, уларҙың бала-сағаһы, беҙҙең ғаилә, мәрхүмә Әсейә инәйемдең вафатынан һуң өләсәйем ҡулында ҡалған Фәсхетдин, Рафаэль абзыйымдар, бүтән алыҫ һәм яҡын туғандарҙы һанаһаң, әлеге ят тәмтомлы посылканан кеше башына остоҡ ҡына өлөш тәтей, әммә бит күстәнәсе лә затлы, йәнә йыл буйы уны һағынып һөйләмәҫлек тә түгел шул.

Беҙ үҫә төшөп, донъялар бер аҙ ипкә килгәс, етмешенсе йылдарҙа абзыйым һирәкләп булһа ла ҡайтҡылай ҙа башланы. Ә бер йылды бала-сағаһын, еңгәмде алып ҡайтты. Ай-һай, һылыу ине Хаят еңгә! Нәҙек оҙон кәүҙәле. Өҫтөндәге күлдәктәре, ялтыр алҡалары минең, үҫмер ҡыҙҙың, һушын алғайны. Хәйер, Әҙһәм абзыйым үҙе лә бит һылыу кеше. Матур итеп һөйләшә, ыҫпай кейенеп йөрөй.

Май байрамына ҡайтҡайным. Әҙһәм абзыйым да килеп төшкән икән. Әнейемдең һылыуы Зәйтүнә апайымдар матур итеп табын ҡорған. Олоғая төшкән абзыйымдың сәстәренә сал йүгергән. Fәҙәтенсә сабыр. Ултыра-ултыра ла, йырлағыҙ әле, Әминә апай, йырла, тип үтенә. Әнейем матур тауышы менән йырлап ебәрә. Оҙон көйгә лә, яңы сыҡҡан йырҙарға ла маһир. Абзыйым тыңлай ҙа илай, тыңлай ҙа илай.

— Ҡисә радионан “Тыуған ауылым” тигән йыр ишеттем, шуны йырлағыҙсы әле, — тип үтенә ул.

— Белмәйбеҙ, — тиешә беҙҙекеләр, — яңы бит ул. Ана Тамара йырлаһын!

Хөсәйен Әхмәтовтың моңло был йырын, әлбиттә, өйрәнгәнмен, әммә әнейем, Рауза, Вәрә апайым кеүек моңло кешеләр алдында йырлап ултырырға иҫәрҙер шул мин!?

— Йырла, һылыу, — тип үтенделәр. Табынға абзыйымдың Күгәрсен районындағы Теләүембәт мәктәбендә бергә уҡыған класташтары Разыя, Мәфтуха апайҙар ҙа саҡырылғайны. Нишләйһең бит, ҡурҡып ҡына йырлап ебәргән булдым. Ә абзыйым илай...

Өлкәндәрҙең үҙ иҫтәлектәре. Минең табындан сығып ысҡынып, дуҫтарым, йәштәштәрем янына, Ҡасурын буйына һыпыртҡым килә. Һауыт-һабаны бер аҙ йыйыштырҙым да сығып та йүгерҙем.

Ә унда!... Тыпырлаталар ғына. Усаҡ яғып ебәргәндәр. Гармунсы бысылған ағастың төбөнә ултырған да бейеү көйҙәрен һыҙҙыра ғына.

Муйылдың ҡотороп сәскә атҡан сағы. Баш әйләндергес хуш еҫ быуындарға төшөргөс хис-тойғолар уята, аяҙ май күгендәге эре-эре йондоҙҙарҙың арбағыс сихри ҡөҙрәте күңелдәрҙе иҙрәтә. Билдәле бит инде, шауҡымлыраҡ ҡыҙыҡай мин, шиғыр сығарам, тыуған тәбиғәтебеҙ хозурлығынан хискә биреләм. Егетем гармун тарта. Һоҡландырғыс тәбиғи аһәң артынан эйәреп, бер үҙем Наҡаҫ буйлатып үргәрәк киттем дә барҙым. Илаһи көс етәкләп алып барған төҫлө. Бер аҙ ара үтеп, гармун тауышы алыҫайғас, ҡараңғылыҡ эсенән мөңгөр-мөңгөр һөйләшкән тауыштар ишетелде. “Әһә! — тип шатланып киттем мин. — Хәҙер берәүҙәр серенең шаһиты булам!” Шым ғына ағас ҡыуаҡтары аша тауыш янына яҡынлайым һәм яйлап ҡына боҫам да ҡолаҡты ҡарпайтам:

— Их... — тип уфтана ир тауышы. — Донъяны аңламаҫһың... Алдыма бына мең сибәр ҡатын теҙеп ҡуйһындар, ике күҙем барыбер һине эҙләйәсәк.

Вәт әй!... Минең ҡолаҡтар яна башлай. Әҙһәм абзыйым да баһа! Икенсеһен дә танырым. Иҫ-аҡыл китә минең. Тормош иптәшен ерләгән, ете балаһының өлкәндәре бәлиғ булып бөткән өлкән йәштәге апайға ниндәй һүҙҙәр әйтелә!.. Йәнә әллә ниндәй һүҙҙәр һөйләй уға Әҙһәм абзыйым. Апай өндәшмәй, шым ғына илай ҙа илай.

Шыуышып ҡына кире сыҡтым боҫҡан урынымдан. Шаңҡып тигәндәй усаҡ янына кире килдем. Әллә нишләнем. Аҡылым етте: эсемә, төпкә йәшерҙем әлеге төндә шаһит булған ваҡиғаны.

Бер нисә йыл үтеп, аҡыл да ултыра төшкәс, әнейемә һөйләнем. Ул аптырамаңы.

— Тәүге мөхәббәте арҡаһында ситкә сығып китте лә инде абзыйың, — тип уфтанды ул. — Мәктәптә уҡығанда уҡ яратышалар ине. Шунан һуғыш сыҡты. Ҡыҙҙы аталары яраланып һуғыштан иртәрәк ҡайтҡан ошо ауыл егетенә бирҙеләр ҙә ҡуйҙылар. Әҙһәм фронттан лейтенант званиеһына етеп, оҙаҡҡараҡ ҡалып ҡайтты. Ул ҡайтҡанда һөйгәненең улы бар ине инде. Абзыйың, әнкәйемдең берҙән-бер улы, ғәрләнеп ситкә сығып китте. Ана, хәҙер тыуған яҡтарын һағынып, һыҙлана-һыҙлана Азияла йәшәй. Олоғая. Хәҙер бигерәк тә нык һағына. Миңә һөйләп китте ул осрашып һөйләшеүҙәре хаҡында. Үҙ аҡылдары үҙҙәрендә. Ни тип кәңәш бирә белмәнем.

Ғәжәп, әнейем дә кәңәш бирә алмаç хәлдәр бар икән дә...

...Ауылға ҡайтҡан һайын әле лә Ҡасурын шишмәһенә барып урайым. Бер нәмә лә эҙләмәйем, йәшлек мөхәббәтемдән дә һыуынғанмын. Әммә ерек, ҡарамалар, олоғайышҡан муйылдар араһындағы әллә кемдәрҙең илерткес хистәре, мөхәббәт тойғоларының шәлкем-шәлкем шауҡымы елдәй йүгереп килеп сыға ла, хәҙер инде байтаҡ ғүмер, ҡайғы-хәсрәт, шатлыҡтар кисергән йөрәгемде семетеп-семетеп китә.

Бына шулай. Аулыбыҙҙа күптәр белмәгән мөхәббәт яҙмыштарының шаһиты булдым. Хәйер, йәнә байтаҡ серҙәр беләм әле мин...

...Совет осорондағы Көйөргәҙе районы етәкселегенең беҙҙең ауылға әллә ни һан бирмәүе хаҡында әйткәйнем инде. Мин Өфөлә әҙәм ҡорона инә башлағас, ауылдаштарым осрашыуҙарға саҡыра башланы. Үҙем менән республикала танылыу яулаған байтаҡ шәхестәрҙе алып ҡайтып күрһәттем. Нурия Ирсаева, Суфия Ҡорбанғәлиева, Тәнзилә Үҙәнбаевалар сәхнәнән тороп та, табындар артында ла йырланы, Фәнил Ҡоҙаҡаев, Әхмәр Үтәбай, Йомабикә Ильясова, Гөлназ Ҡотоева, Риф Тойғонов, Ҡәҙим Аралбай, Рәлиф Ҡинйәбаев, Сәрүәр Сурина, Лариса Абдуллина, Азамат Юлдашбаев, Шамил Кучуков, Рәйсә Абдуллина, Светлана Әбсәләмова, Фәрзәнә Аҡбулатова һәм башҡалар кеүек арҙаҡлы яҙыусы, журналистар — ауылым, ә ауылдаштарым улар менән танышты. “Әлдә һин бар, исмаһам, өфөләрҙе күрәбеҙ. Күңелле булып ҡала”, — ти ауылдаштарым аҙаҡ.

Бер ҡайтҡанымда телевидение режиссеры Франгизә Илбәкова киноға төшөрөп йөрөнө. Ауылдаштарым Ҡасурын шишмәһе буйында ҡаҙан аçып ебәргән. Йәй. Матур ваҡыт.

Яныма Ишкинин Мирас абзый килде.

— Һылыу, — тине ул бик тә күңеле булып. — Һинең арҡала матур байрамдар, яҡшы кешеләрҙе күреп торабыҙ. Быға тиклем телевизорға төшкән бүтән ауылдарҙы күреп көнләшә инек. Беҙ кемдән кәм, тип уйлай торғайным. Беҙҙең быуын иң ауыр йылдарҙа эшкә егелеп колхозды алға һөйрәне. Минең, һылыу, һиңә бер үтенесем бар: Өфөлә Мортазаға сәләм әйт. Килеп китһен беҙҙең ауылға ла. Мирас абзый саҡырҙы, тиң. Уның менән беҙ йәш саҡта төнгөләктә аттар көтә торғайныҡ. Төнгө усаҡ янындағы әңгәмәләребеҙҙе, картуф тәгәрләтеп ашағаныбыҙҙы онотмағандыр бит. Юҡһа, бүтән ауылдарға бара, үҙенең ауылына китеп барышлай булһа ла беҙҙең Ҡаҙармаға һуғылмай. Күрәбеҙ, уны икмәктоҙ тотоп ҡаршылайҙар. Беҙҙең дә ҡулдан килә ул. Матурлап ҡаршы алырлыҡ рәтебеҙ бар. Әйт, килһен беҙгә лә.

— Әлләсе, — тигән булдым мин. — Тыңлар микән?

— Тыңларлыҡ итеп әйт.

...Теге телетапшырыуҙы күрһәттеләр. Ауылдаштарым бер нисә минут ҡына күренеп ҡала. Шулай ҙа бик матур иçтәлек. Ә республикабыҙҙың тәүге президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовты бер генә лә күҙмә-күҙ ósрата алманым. Мирас абзыйҙың аманат-сәләмен дә еткереп булманы.

Ауылым Ҡинйәбай...

Мин ауылдан 14 йәшемдә сығып киттем. Унан бирле күп һыуҙар аҡты, байтаҡ ваҡиғалар булып үтте. Һин дә мин колхозсы булып көн күргән ауылдаштарымдың шул хужалыкта эшләп ғаиләһен туйындырған заманалар артта ҡалды. Күптәр, шул иçәптән мин дә, ул осорҙоң диктатын һәм коше-

не ирекһеҙләүен әллә ни яратманым. Әммә бөгөнгө көн күҙлегенән сығып баһалаһаң, ул ваҡытта ғаиләләрен ҡалдырып, ер аяғы — ер башында мал табырға мәжбүр булыу кеүек күренештәр ауылдаштарымдың төшөнә лә инеп сыҡманы. Дөрөҫ, колхоз ҡоролошо уйһыҙ батрактар ойошмаһы ине ул. Ләкин халыҡ бит туҡ булды, эш хаҡы килеп торҙо. Иген, шәкәр эш көнөнә ҡарап таратылды. Ауылым халҡы йәнеләй күргән урмандың ҡороған ағастарын яғыулыҡҡа тотондо. Урманды таҙартыу, уны һаҡлау, кәрәк урындарға ағас үҫентеләре ултыртыу, уларҙы тәрбиәләү, утау, күмеү эштәре лә яйға һалынғайны. Мин үҙем генә лә урман һыҙаттарында нисәмә-нисә ҡарағай ултырттым. Дөрөҫ, бөгөн йорт һалайым тип ағас һораһам, мин ултыртҡан ҡарағайҙарҙың бер өйлөк булыуына бер кем дә ташлама яһамаясаҡ һәм көс етмәҫлек хаҡ талап итәсәктәр. Бындай ғәҙелһеҙлектәр минең барлыҡ йәштәштәремә лә ҡағыла, донъя ҡорорға, балалар үҫтерергә ниәтләгән йәш быуындың бәкәленә һуҡҡан бындай кешелекһеҙ ҡанундар күңелде ҡайтарып, електе һура. Ә беҙҙең атай-олатайҙарҙың тыуған илгә күрһәткән изгелектәрен, түккән ҡанын иҫәпләһәң? Ирекһеҙҙән океан аръяғы илдәренең ике тиҫтә, унан да күберәк ваҡыт үҙгәрештәр кисермәй, кеше хоҡуҡтарын яҡлаған Конституцияһына һоҡлана башлайһың. Ни өсөн илебеҙ дөйөмләштерелгән идеалдарға табына? Ни өсөн илебеҙ беҙҙе яратмай? Беҙҙең бөгөн йәшәгебеҙ, бәхетле булғыбыҙ килеү хыялдарыбыҙҙы һындыра?

Сөнки илебеҙ Йөрәк, Рухиәт һәм Аҡыл берҙәмлегенең мәғәнәһен төшөнөп етә алмай әле. Эйе, илебеҙҙе аҡылһыҙлыҡта ғәйепләп булмай, беҙ генетика буйынса асыштар яһарға, йыһан киңлектәренә экскурсия яһарға, океан төпкөлдәренең серен асыҡларға һәләтлебеҙ, әммә төп етешһеҙлегебеҙ шунда: эргәбеҙҙәге замандашыбыҙҙы, күршебеҙҙәге кешене аңларға, хәленә инергә, уның хыялы һәм идеяларына ҡолаҡ һалырға, шулар менән иҫәпләшергә, нәҡ шул өҫтөнлөктәрҙе йәшәү ҡағиҙәһе итергә һәләтһеҙбеҙ. Һәм нәҡ шул һәләтһеҙлек — Аҡыл менән Рухиәттең дисбалансы беҙҙе бәхетһеҙлектә йәшәп, үкенестәр менән донъянан китергә дусар итә лә инде. Һәр хәлдә, миңә шулай күренә.

...Минең шағир һәм шәхес булып формалашыуыма ниндәйҙер ҡырҡын йоғонто яһаған уҡытыусым булманы. Фәлән кешенең йүнәлеш биреүе арҡаһында мин үҙ ҡибламды таба алдым, тип әйтмәҫ инем дә, ләкин ғүмерем ағышына рухи халәте, йөрәге, зиһен даирәһе кимәленә күрә етәкселек иткән әнейем Әминә Аллабирҙе ҡыҙының яҙмышымдағы урынын әле килеп ни сама һиммәтле булыуын баһаламай булдыра алмайым.

Алдараҡ телгә алыуымса, уның беҙҙең беребеҙҙе лә системалы тәрбиәләрлек тәжрибәһе юҡ ине. Ул ни бары беҙҙе тын ғына, эсенән генә яратты. Ҡосаҡламаны, үпмәне. Яратам, тип әйтмәне. Ҡулынан килгән шарттарҙы булдырҙы, белеме менән уртаҡлашты. Һәм өмөтләнде. Ә уның өмөттәрен кемебеҙ аҡланы һуң? Һорауға яуапты ер өҫтөндә йәшәп ятҡан өс балаһы бирһен, әйҙә. Йөрәге, намыҫы ҡушҡанса.

Донъялыр был...

## “Ағиҙел”дәргә сумайым...”

*Ағиҙелдән кәмә килә*
*Ҡылдан нәҙек эҙ менән.*
*Яндырҙылар эскәйемде*
*Нахаҡ әйткән һүҙ менән.*

*Халыҡ таҡмағы*

“Ағиҙел” журналында эшләү минең өсөн, берҙән, торғаны бер университет булһа, икенсенән, журнал концепцияһы, йөкмәткеһе эсенә сумып китеп эшләү сәбәпле редакция икенсе йортома әүерелде. Мин эштә лә, өйҙә лә журнал мәшәҡәттәренән айырыла алманым. Ғәҙәтем дә шундайыраҡ инде: күңелемә ятҡан шөғөлгә башкөллө сумам да ҡуям. Миңә һөҙөмтә кәрәк. Фекер, образ йәнгә ойлаһа, шиғырҙы үҙем аңлаған кимәлгә еткермәйенсә туҡтамайым. Ҡулыма энә алып, бәйләм бәйләргә ниәт итһәм, бәйләмем, күңелемдә яралған ҡиәфәткә инмәй тороп, туҡтай алмайым. Донъя мәшәҡәттәрен дә ҡабалан-ҡабалан башҡарам. Башлаған эшемдең осона сығыр өсөн ҡыҙышам да китәм. Һөҙөмтә! Һөҙөмтәне бөгөн үк, бик булмаһа, тиҙ арала күрергә кәрәк миңә. Хәсиәтем шундай.

Журнал эштәренә мөнәсәбәт тә шундайыраҡ булды. Бөгөн эшләй торғанды иртәгәгә ҡалдырыу, мәлен, илһам килеүҙе көтөү минең өсөн — ят нәмә. Бөгөн, нәҡ бөгөн башҡарып ҡуйырға тейеш мин ниәтләгән, планлаштырған эшемде. Сөнки республика мәҙәниәтенең интеллектуаль кимәлен билдәләүсе баҫмала хеҙмәт итеүҙе мин намыҫ эше тип баһаланым. Әҙәбиәт, сәнғәт һөйөүселәрҙә зауыҡ тәрбиәләргә тейешбеҙ, тип инандым. Башҡорт әҙәбиәте — ҙур әҙәбиәт, әммә “Ағиҙел” шул әҙәбиәттең иң гәүһәр өлгөләрен генә еткерергә тейештер ул уҡыусыларына. Дөрөҫ, күңел талабың булғас, һин һәләтеңдән килгәнсә ижад итергә хоҡуҡлыһың. Әммә һәр ялтыраған алтын булмай. Һәр ижадсы үҙ хеҙмәтен, әлбиттә, юғары баһалай. Тик аҡты ҡаранан айырырлыҡ бүлек мөхәррирҙәре бар бит. Нәҡ улар журналдың йөкмәткеһе һағында тора ла инде. 21 йыл журналға һәм башҡорт әҙәбиәте, сәнғәтенә хеҙмәт итеүем осоронда мин илебеҙ һәм милләтебеҙ мәртәбәһен юғары тотоп ғүмер иткән талант эйәләре менән аралашып йәшәнем, улар ижады хаҡында мәҡәләләр яҙҙым, шағирҙарҙың иң күрмәлекле әҫәрҙәрен журнал өсөн әҙерләп, күп ҡыуаныстар, һоҡланыулы тойғолар кисерҙем. Көйөнгән саҡтар ҙа булды. Әрһеҙерәк, таланты самалы әҙәмдәр юғарыраҡ кешеләр аша журнал биттәренә килеп ҡунаҡлар булды. Нишләйһең бит, атайым әйтмешләй, “донъядыр бу...”

Миңә төрлө йылдарҙа Абдулхаҡ Игебаев, Рәшит Солтангәрәев, Рәмил Йәнбәков, Гөлнур Яҡупова, Ғәлим Хисамов, Рәүеф Насыров, Әхмәр Үтәбай, Хисмәт Юлдашев, Рәлис Уразғолов, Салауат Әбүзәров, Гөлназ Ҡотоева, Сабир Шәрипов, Мәүлит Ямалетдинов, Сафуан Әлибаев, Хәсән Назаров, Мәхмүт Хужин, Ринат Камалдар менән эшләргә насип итте. Уларҙың һәммәһе лә башҡорт әҙәбиәтенең арҙаҡлы әҙиптәре.

Әйтеүемсә, “Ағиҙел”дән киткәс, мин “Панорама Башкортостана” журналына эшкә индем. Русса мәҡәләләр яҙырға тотондом. Ысын әйткәндәрҙерме, былай коллектив маҡтаған була торғайны: “Журналға яңы, етди фекерле мәҡәләләр килеп инде”. Әммә ауыр сиргә тарып, түшәккә йығылдым. Ике йыл самаһына һуҙылған сараһыҙлыҡты врачтар, тоғро дуҫтарым, йәш ҡәләмдәштәрем, һылыуым ярҙамында еңеп сыҡтым, буғай.

## Дауахана

Дауахана тәҙрәһенән өрә...
Яҡынлайым тимә,
Ныҡ һалҡын.
Надя апай илай.
Мин саҡ тымдым.
Сәләмәт ғәм күрер кәрәк ине,
Уколдарынан да ялыҡтым.

Морг ишеге күренә...
Хоҙай — Раббым...
Эсем өҙөлөп китте...
Бөгәсә
Гөлдәр шунда төн үткәрә.
Ҡисә
Тамамланды ҡапыл ғүмеркәйе,
Тамамланды ерҙә күрәсәк.

Шул тиклем дә өшөү була икән...
Ауыртынам.
Дер-дер йән-тәнем.
Бер коридор аһ-зар,
Белһәң икән
Хәсрәт ояһында табиптарҙың
Ни йәм табып ғүмер иткәнен.

Тәҙрәләрҙән өрә.
Үңәсемде
Өҙә яҙып һөҙәм ишара.
Бер фәрештә иҫенә төшөрмәҫме?
Һурып алыр бәлки был ғазаптан,
Интегә, тип, бәндәм, бисара.
Тышта аҡлыҡ.
Ошо яҡты сафлыҡ
Беҙ барлыҡты шәйләр,
Һуғылыр.
... Ҡыҙҙар йөрөгән була
Яланбашсан.
Иҫегеҙгә төшөр, алйотҡайҙар,
Иҫегеҙгә төшөр.
Һуң булыр.

Күрше палатала өс көн, өс төн
Зар илаған ҡатын
Юҡ хәҙер...
Миңә йәнәш ятҡан Ольга үтте...
Имен һауыҡҡандар бар-барлыҡҡа,
Миңә ниндәй өлөш эләгер.

Ҡыҙым алып килгән аш та туңған
Тәҙрә төбөндәге һалҡында.
Наркоздарҙан иҫерек тубал башым,
Ерҙә рәхәт күргән кешеләй булып,
Хыяллана йәшәү хаҡында.

* * *

Эшһеҙ йәшәүгә күнегеп булмай. Дөрөҫ, яҙыусының эшһеҙ торған сағы булмай. Мәҡәләләр яҙам, гәзиттәргә тәҡдим итәм. Шиғырҙар һирәк яҙыла. Һыҙланыуҙар туҡтамағас, эмоциялар кәмей. Хис-тойғоларһыҙ шиғыр шиғырмы ни инде ул. Рифмалаштырыу оҫталығы, шөкөр, үҙләштерелгән дә ул. Шиғыр өсөн был ғына аҙ. Уның ниндәй булырға тейешлеге хаҡында мин "Уйсандар, һеҙгә өндәшәм" тигән китабымда яҙғайным инде.

"Ағиҙел" журналында эшләгәндә байтаҡ авторҙар менән эш иттем. Мәҡәләләрен рәткә һалдым, кәңәштәр бирҙем. Лариса Абдуллина, Азамат Юлдашбаев, Зөлфиә Ханнанова, Гөлназ Ҡотоева, Дамир Шәрәфетдинов, Лилиә Сәғиҙуллина, Ғәлиә Ҡәлимуллина, Римма Ғәлимова, Лена Сирусина, Ғилман Ишкинин, Айһылыу Ғәрифуллина, Мөнир Ҡунафин, Рәшит Заһиҙуллин, Мөнир Ихсанов, Фәнил Бүләков, Ринат Сөләймәнов кеүек талант эйәләренең таянысы булырға тырыштым. Нәҡ ошо башҡорт әҙәбиәтенең терәк бағанаһына әүерелгән һәм әүереләсәк талант эйәләренең башланғыс ижадтарын матбуғатҡа сығарыу, китап нәшриәтенә тәҡдим итеү кеүек эштәрҙә ҡатнаштым.

Үкенес, мин Яҙыусылар союзы идараһының шиғриәт секцияһы рәйеслегенән дә, аҙаҡ килеп “Ағиҙел” журналы редакцияһынан да киткәс, йәш таланттарҙың әҫәрҙәре гәзит-журнал биттәренән төштө. Ә бит улар башҡорт әҙәбиәтенең бөгөнгөһө һәм киләсәге. Таланттарға таяныс кәрәк, уларҙы көйләп-сөйләп тороу ҙа яҙыҡ түгел, ә талантһыҙҙар юлды үҙҙәре ярыусан. Телгә алынған таланттар үҙҙәре лә миңә хөрмәт менән ҡарай, хәҙер, олоғайған көнөмдә, уларҙың йылыһын һәм хөрмәтен тойоп йәшәйем. Күбеһе менән даими бәйләнештәмен, уларҙың низәр атҡарып ғүмер итеүен, балаларының, ғаиләләренең хәл-әхүәле менән хәбәрҙармын. Үҙҙәре лә серҙәре менән уртаҡлашалар.

Һуңғы йылдарҙа мин тележурналист Шамил Кучуков менән дә бәйләнештәмен. Уның “Телеүҙәк”, “Ҡайтайым ауылыма” тапшырыуҙарынан ысын мәғәнәһендә ҡәнәғәтлек кисерәм. Күтәргән темаларының тослоғонан, геройҙарына булған хөрмәтле мөнәсәбәтенән дә ризамын. Ай-һай, ниндәйерәк шәхестәребеҙ бар бит беҙҙең! Исем-шәрифтәре таныш булһа ла, Шамил Кучуков ярҙамында уларҙың эске донъяһы, тамырҙары асылына яҡынлау шәхестәребеҙҙең мәртәбәһен йәнә лә күтәреп ебәрә. Шамилдың үҙенең әйтеүенә ҡарағанда, йөҙҙән ашыу кеше менән яҡындан таныштырҙы ул беҙҙе. Әйттем: “Шамил мырҙам, ҡулыңда, йөрәгеңдә баһалап бөтмәҫлек байлыҡ, мәғлүмәт. Ана шул геройҙарың хаҡында китап яҙ. Ғүмер — аҡҡан һыу, бөгөн күҙ өҫтөндәге ҡаш булып йөрөүселәр ҙә тора-бара урынын йәштәргә бирәсәк, һәр замандың үҙ кумирҙары, магнитлы яҙмалар ҙа юғала, ә китап — мәңгелек. Заманабыҙ хаҡында иҫтәлек булыр яҙған китабың”. — “Ваҡыт юғыраҡ, кәңәшең шәп тә ул...” — тип ҡуйҙы. Моғайын, кәңәшемә ҡолаҡ һалыр егәрле, фекерле, ҡаҡшамаҫ рухлы егет. Ғөмүмән, уның кеүек рухыбыҙға тоғро, яҡшыларҙың яҡшылығына һоҡлана белгән киң күңелле һәм зиһенлеләр күберәк булһын ине. Тегегә-быға алданмай, донъя арбаһына егелеп, тап ирҙәрсә тормош эсендә ҡайнай. Үҙе ул Күгәрсен районының Түләбай ауылы егете. Алдараҡ әйткәйнем инде, беҙҙең Ҡинйәбай ауылы бынан 300 йыл элек Түләбайҙан күсеп сыҡҡан. Шамилдың атаһы Шакир Әмәкәс-Уңғар ауылында тыуған икән. Әмәкәс-Уңғарҙың Хәсәновтар нәҫеленән булып сыға Шамил. (Әйткәндәй, минең өләсәйем Ҡамила ла Уңғарҙан, Хәсәновтар нәҫеленән). Атаһы иртә вафат булып, ҡәрсәһе ҡулында үҫкән. Тәрбиәне ныҡтан биргән, күрәһең, Кучукова фамилиялы ҡәрсәһе. Ҡыпсаҡ ҡатыны бит.

Ә Зөлфиә Ханнанова һуң? Ниндәйҙер эскерһеҙ һәм яҡлауһыҙ күңел киңлектәре һәм зиһен даирәһендә йәшәй ул. Фекерҙәре тәрән һәм ерлекле. Күңеле кешелекле Зөлфиәнең. Хәлгә инә белә, вазифаһына (Өфө мэрияһында эшләй), дуҫлыҡҡа тоғро һәм эшкә һәләтле. Шиғриәтендәге образдар сағыу, камил һәм халҡыбыҙға хас моң менән һуғарылған. Йәнә Лариса Абдуллинаның егәрлелегенә, шиғырҙарына, кешелекле сифаттарына, Гөлназ Ҡотоеваның тырышлығына, шулай уҡ шиғриәтенә һоҡланам һәм ил хеҙмәтендәге эшмәкәрлектәренән ризамын.

Ғөмүмән, Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла әҙәбиәткә дәүләт тарафынан иғтибар бермә-бер һыуынды. Иң үкенеслеһе шул — донъя күргән китаптарға талап юҡ. Халҡыбыҙ китап уҡымай. Донъя малы, кәйеф-сафа, ҡояш аҫтындағы урын өсөн айҡашып ғүмер кисерә. З.Вәлиди исемендәге Республика Милли китапханаһы директоры Айгөл Моратова әйтеп торҙо: республиканың ҡала, район, ауыл китапханаларына ебәрелгән башҡорт китаптарын йылдар буйы асып та ҡарамау осраҡтары йышайған.

Быңдай шарттарҙа йәш быуын әҙәби ижадҡа ылығып бармай. Энтузиаст яҙыусыларҙың да күңеле ҡайта бара. Бынан ары китап яҙып маташырғамы, юҡмы? Донъялыр был...

## Башҡортостаным

...Сөнки беҙгә ҡибла бирәү генә —
Башҡортостан тигән ил-ватан.
Һелтәйҙәрме ҡамсы,
Араҡыға
Тығалармы башын халҡыбыҙҙың,
Ауалармы ирҙәр ҡороҡтан, —
Өс усаҡтан ҡыҫыҡ күҙебеҙгә
Сарпылыр ҙа осҡон, айныҭыр.
Илем, Телем, Ерем — шул өс иман
Булһа ғына башҡорт халыҡтыр!

Башҡортостан бында тыуып үҫкән һәр кеше өсөн ғәзиз төйәк, илһам сығанағылыр ул. Бигерәк тә быуат-быуаттар буйы йәнен, ҡанын аямай илен, ерен ҡурсалап ғүмер иткән башҡорттар өсөн Башҡортостан, уның тау-урмандары, йылға-күлдәре, һәр төбәге “әсәләрҙең ҡуйыны шикелле” йылы һәм ҡәҙерле.

Журналислыҡ һөнәрем мине юлдарҙа күп йөрөттө. Башҡортостандың барлыҡ ҡалаларын да, Әлшәй менән Краснокаманан тыш, бөтә районларын да күрергә насип итте. Халҡыбыҙҙың йәшәү ҡағиҙәләре, үҙенең рухы һәм ҡиблаһына тоғролоғо минең дә күңелемде нығытты, байтаҡ нәмәләргә өйрәтте. Башҡортостан кешеләре генә түгел, уның ҡабатланмаҫ тәбиғәте лә йәнемә яҡтылыҡ булып яғылып илһамландырҙы, шиғырҙар яҙырға әйҙәне. Былай мин ғүмерем эсендә Рәсәйҙең дә бер аҙ өлөшөн күрергә өлгөрҙөм. Ҡырым, Кавказ, Украина, Балтик буйы республикаларында булырға яҙҙы. Палдиски ҡалаһына Тамара Нечаева ҡойған скульптураны “Икарус” автобусында алып барған саҡта Татарстан аша үттек, Владимир, Горький (Түбәнге Новгород), Псков, Новгород, Тарту, Таллин ҡалалары менән таныштыҡ. Урыҫ ауылдары аша үткәндә беҙҙекеләргә оҡшамаған архитектура ла ҡыҙыҡһыныу уятҡайны. Рәсәйҙең беҙ үткән ерҙәре тәбиғәте менән бик үк күҙ ҡыҙырлыҡ түгел. Тигеҙлек тә тигеҙлек, сәселмәгән яландар, тыш яҡтан ҡаралмаған йорттар. Өйҙәр, нишләптер, бер-берећенә ныҡ терәтеп һалынған, уның ҡарауы, кәртәләүҙәр, ҡапҡалар бейек.

Горькийҙа мин йәһүд милләтле журналист дуҫтарымда ҡунаҡта булып өлгөрҙөм, пролетар яҙыусы Максим Горькийҙың йорт-музейын күрҙем, ундағы Кремль майҙаны эсендәге Минин менән Пожарскийға ҡуйылған һәйкәлгә сәскәләр һалдым. Был икәүҙең Рәсәй өсөн алышҡа күтәрелешендә башҡорттарҙың да өлөшө ҙур булыуы билдәле. Дуҫтарым Ася менән Марк Векселлерҙар “ЛогоВАЗ”ға ҡаршы ғына йәшәгән Вениамин исемле институт уҡытыусыһына ҡунаҡҡа алып барҙы. Улар автозаводтан революция кеүек нәмә килеп сығасағында шикләнмәй ине. 80-се йылдар аҙағы. Ҡөрсөккә терәлгән ил халҡы үҙгәрештәр көткән саҡ. Ләкин... “ЛогоВАЗ” Борис Березовский ҡулына төштө, ә уның донъяны үҙгәртеү сараһы һәм маҡсаты тик үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртыуға ғына йүнәлтелде.

Эстонияла беҙҙе һалҡын ҡаршыланылар. ВЛКСМ-дың Эстония Үҙәк комитетында Рәсәйҙән айырылыу идеяһы менән яналар, Таллин урамдарында 20—30, хатта унан да аҙыраҡ йыйылышҡан төркөм-төркөм кешеләр ҙә ана шундай лозунгтар аҫтында үҙҙәренсә йырлап-бейеп яҡты киләсәк хаҡында хыяллана. Беҙҙең

Башҡортостанда ул осор тыныс ине әле. Ҡомпартия урынында, бөтә көнитмеш Ҡонституцияның 6-сы статьяһы етәкселегендә алып барыла.

Рәсәй — ҙур ил. Ул беҙҙең ватаныбыҙ. Сөнки нәҡ Рәсәй өсөн беҙҙең ата-бабаларыбыҙ күп ҡан ҡойған һәм башын һалған. Дөрөҫ, ул ирҙәр тәү сиратта үҙ атайсалы — Башҡортостан именлеге өсөн яуға күтәрелгән.

Ә Башҡортостан... Мин Өфөнән Сибай, Баймаҡ яҡтарына барған юлды яратам. Алыҫ юл ул. Ялҡытып та китә. Тауҙар, йылғалар аша, урман эстәренән бараһың да бараһың. Юл буйында урман төпкөлдәренән атылып сыҡҡан ваҡ ҡына шишмәләр осрай. Улар янында туҡтап һыу эсеп, тамаҡ ялғап, бер аҙ ял итеп китерлек ҡулайлама өҫтәлдәр, ҡыйыҡлы беседкалар бар. Тирә-яҡ тулы сәскә. Мин шул юлда барғанда осраҡан бейек осло тауҙарға ҡарайым да үҙемә шундай һорау бирәм: "Анау түбәгә берәр кешенең менеп еткәне булдымы икән?" Булғандыр ул, тип уйлайым. Боронғо һунарсылар ҡыҙырмаған тауҙар бар тиһеңме ни?! Ғөмүмән, тауҙар мине гел үҙенә тарта, арбай. Арҙаҡлы яҙыусыбыҙ Ноғман Мусиндың тыуған ауылы Ҡолғонаға барған юлда Кәлим оҫҡан тип исемләнгән уҡлы ҡая бар. Ул Кәлим тигән кеше анау тиклем бейеклеккә барып менергә нисек йөрьәт иткәндер? Әлеге лә баяғы кейек аулап йөрөгәндә яңылыш ысҡынып ҡына осоп төшкән дә ҡуйғандыр бит. Ә ҡая, ай-һай, бейек... Ниндәйҙер сер бар кеүек бейек ҡаяларҙа. Ирәмәлде лә күргәнем булды. Башына үрмәләргә насип итмәне. Торатауға күтәрелгәнем булды. Ер өҫтөндә Ирәмәл, Ирәндек, Торатау кеүек изге тауҙар беҙҙән башҡа ерҙәрҙә лә етерлек. Австрияла, мәҫәлән, Йәйғор-тау тип аталған урын бар, тиҙәр. Бейеклеге — 300 метр, оҙонлоғо 3 километр булған был тауға хатта менергә лә рөхсәт ителмәй. Урындағы халыҡ быны шулай аңлата: "Тау беҙгә тиклем дә булған, беҙҙән дә ҡаласаҡ. Уны тәләфләргә ярамай".

Ирәндеккә күтәрелгәнем бар. Ғәҙелша шарлауығына. Мәләүез районының Сорғояҙ ауылы тирәһендәге исемһеҙ шарлауыҡтың да бейектәге ҡаялар эсенән килеп сыҡҡан ерен күреп хайран булғайным. Һанай китһәң... Мораҙым мәмерйәһе, Салауат мәмерйәһе, Арҡайым ҡалаһы янындағы яландарҙы буйлау, тауҙарына менеү... Әйткәндәй, мин ул тиклем мистик түгел, шулай ҙа Арҡайымдағы Мөхәббәт тауында баҫып торғанда үҙемдең йыһан ҡаршыһындағы дәүмәлемде самалап, илаһи бейеклек юғарылығынан үлсәһәң, ниндәйҙер бөжәк кеүек кенә булыуымдан илап ебәргәйнем.

Мине бик ныҡ тетрәндергәне Шүлгән мәмерйәһе булды. Ташлы ҡая бейеклегенә йылға нисек күтәрелгән икән ул? Ҡайҙа уның башланғысы? Ни өсөн зәңгел һыу тышҡа ағып сыҡҡас та йылынмай? Шүлгән мөғжизәһе, уның кеше аңына йоғонтоһо хаҡында ла ишеткәнем булды, нисәмә-нисә легенда, риүәйәттәрҙе һәм аҡыл менән күңел туҡымаһынан ижад ителгән эпостарыбыҙҙы ла уҡып беләм юғиһә, әммә ауыҙ-тел ижадына маһир, художестволы фекерле халҡыбыҙҙың фантазияһылыр, тип уйлай торғайным. Ә ул ысын булып сыҡты.

Беҙ Шүлгәнгә "Ағиҙел" журналы коллективы менән барғайныҡ. Йәйҙең матур ваҡыты. Минең маҡтаулы һәм данлыҡлы Бөрйән районына беренсегә юлланыуым. Журнал уҡыусылары менән осрашыуҙар ойошторҙоҡ һәм, килгәс-килгәс ял итеп тә ҡайтайыҡ тип, палаткалар ҡороп, рөхсәт ителгән урында усаҡ яғып ебәрҙек. Аш бешереп ашаныҡ, Ағиҙелдә һыу индек. Бер осраҡтан һуң шундай һығымтаға килдем — Шүлгәндәге серле илаһи көс яҡшы күңелле кешеләргә ҡөҙрәт биргән кеүек, эскерле, күңеле һай кешеләрҙең иң төптә ятҡан асылын да түңкәреп һалырға һәләтле.

“Ҡиске Өфө” гәзитендә донъяның ете мөғжизәһе хаҡындағы мәҡәләләремде баҫтырғайным. Башҡортостандың да ете мөғжизәһе бар бит, тигән фекер менән илһамландырҙы ул журналистарҙы. Фекерҙе Башҡортостан телевидениеһы күтәреп алды һәм шоуға оҡшаш сара ойоштороп, ул тамаша Өфөнөң Конгресс-Холл бинаһында уҙғарылды. Идея башланғысы кемдеке икәне телгә алынманы. Ҡыҙыҡ булды шулай ҙа.

Мөғжизәләр араһында “Красноусол” шифаханаһы ла бар ине. Унда дауаланғаным булманы. Бер мәл үҙ яйым менән барып сыҡҡайным. Административ корпуста дауахананың хаҡтары хаҡындағы белешмәне уҡып, сәстәрем үрә торҙо. Бер көн дауаланыу һәм йәшәү — өс меңдән алып биш меңгә тиклем. “Ул хаҡҡа, — тип уйланым мин, — өйөмдә йоҡом туйғансы йоҡлап, көн һайын ашамаған емеш-еләк ашап, Ҡашҡаҙан күлендә һыу инеп йөрөһәм, арзанға төшәсәк”. Шулай ҙа был матур урындар күңелемде биләне.

Мин мосолман кешеһе. Ләкин бүтән динле кешеләрҙең инаныстарына хөрмәт менән ҡарайым. Кеше нимәгәлер, ниндәй ҙә булһа ҡанундарға ышанырға, уларҙы изге тип инанырға тейеш.

Башҡортостандың Ғафури районын рус милләтле этнограф Ф.Нефедов “Божественная страна” тип атай. Ул юлъяҙмаларында иҫ киткес мөһабәт Аҡкүлде, Киндерле мәмерйәһен, шифалы шишмәләрҙе телгә ала. Мин дә бындағы ҡышын да ситкә осоп китмәгән, ҡулға эйәләшеп бөткән өйрәктәргә ем һиптем һәм текәрәк кенә ергә һалынған сиркәүҙең манараларына текләп торҙом.

Элек Вознесенск, һуңыраҡ Табынск тип аталған ергә урыҫтарҙың христиан диненә епископ Никон тарафынан индерелгән реформаларҙы ҡабул итмәүселәр килеп урынлаша. Илларион тигән бер монах ошонда монастырь булдыра. Ни рәүешлелер, уныһын Хоҙай ғына белә. Имештер, ошо тирәлә XV быуат аҙағында Вознесенск монастыры монахтары Киндерле мәмерйәһе эсендә Хоҙай Анаһының таҡтаға төшөрөлгән һүрәтен таба. 1734 йылда, имештер, икона ғәйеп була. Христиандар шул һүрәтте әле булһа ла эҙләй... Хәҙер Ғафури районының Усолка, беҙҙеңсә Көгөш йылғаһына, Киндерле мәмерйәһе тирәһенә паломниктар сәждә ҡылыу өсөн йыйылыша. Йыйылышһын әйҙә. Кешене ерҙәге һәм күктәге Юғары ҡөҙрәт йөрөтә лә баһа.

Мине былары түгел, Күк-Ҡарауыҡ шарлауығы ҡыҙыҡтырҙы. Шарлауыҡ ун—ун ике метр тирәһе бейеклектән түбәнгә тәгәрәй. Унан алыҫ түгел ерҙә емерелгән Таш күпер бар. Уны Екатерина II заманында төҙөгәндәр, тиҙәр. Әбей батша талап иткән алтынды тейәп алып китеп барған башҡорттарҙың арбаһы, ошо күпер аша сығып барғанда ауып, алтыны һыу төбөнә киткән, ти. Башҡорттарҙың инаныуынса, имештер, алтындың ҡайҙалыр оҙатылыуына риза булмаған Ер Инәһе хазинаны табылған ерендә ҡалдырыу маҡсатынан эшләгән быны. Ул алтынды ла, иконаны эҙләгән кеүек, эҙләйҙәр ҙә эҙләйҙәр әле. Таба алғандары юҡ.

Башҡортостан... Беҙҙең әлеге сиктәрҙә көн күргән ватаныбыҙға Ырымбур яҡлап килеп инәһеңме, Силәбе, Һарытау, Ҡурған яғынан ҡайтып киләһеңме — ғәзизлек, бөхтәлек, ауылдарҙың матур, төҙөк һәм ҡараулы булыуы, юлдарҙың иркенлеге, тәбиғәт хозурлығы күҙгә ташлана.

Республика райондары халҡы барыһы ла тиерлек ҡунаҡсыл һәм мәрхәмәтле. Башҡорт ауылдарында һалмалы аштар, ҡоротло һурпалар, татлы бәлештәр, бауырһаҡ, ҡымыҙ, ҡаҙылыҡ, тултырма менән һыйлайҙар, татарҙарҙың итле ҙур

бәлеше, ептән дә нәҙек ҡырҡылған туҡмасы ғына ла ни тора. Силәбе башҡорттары һалманы сынаяҡ аҫты ҙурлығында йәйеп, һурпаға шул көйө төшөрөп ҡайната. Ҡумәс тип атайҙар. Беҙҙең яҡта һалманы шаҡмаҡлап ҡырҡалар. Ҡайһы саҡта һурпаһы менән бергә бирәләр, ҡайһы берҙә — һалманың үҙен генә, ә һурпаһын ҡоротлап айырым бирәләр.

Һанай китһәң ул... Ризыҡ-тәғәмгә оҫта беҙҙең халыҡ. Бигерәк тә ит, ҡамыр аштарына өҫтөнлөк бирелә. Рязань өлкәһе райондарында Сергей Есенин ижадына арнап уҙғарылған әҙәбиәт байрамдарында ҡатнашҡайным. Мин ул осрашыуҙарҙа Есениндың “Шаганэ” шиғырын Рәми Ғарипов тәржемәһендә башҡортса уҡып йөрөнөм:

> Шаһәнәм һин минең, Шаһәнәм,
> Төньяҡтанмы әллә булғанға,
> Мин әҙермен һиңә йырларға,
> Ай аҫтында арыш бешкәнен...

Уҡыйым да мәктәп уҡыусыларынан һорайым:

— Мин ниндәй шиғыр уҡыным?

— Шаганэ! — тип бер тауыштан яуап бирәләр.

— Ә һеҙ башҡортса беләһегеҙме ни? — Рәми Ғариповтың тәржемәселек оҫталығының ни рәүешле юғары булыуын ошо бер ваҡиғанан ғына ла баһалап була бит.

Урыҫ милләтле халыҡтың өҫтәлен борщ, кәтлит биҙәй. Хөрт түгел. Улар йәнә колбаса ярата. Ә беҙҙең ҡулыбыҙ мул. Әле бына ҡалаларҙа ғына түгел, ауыл табындарында ла булырға тура килгәндә, хайран ҡалаһың, турамаларҙың, бәлештәрҙең, беренсе, икенсе блюдоларҙың ниндәйен генә әҙерләмәйҙәр! Улар, етмәһә, әллә нисә төрлө. Дөрөҫ, ул саҡлым ризыҡ ашауҙан врачтар тыя, әммә беҙ өйрәнгәнбеҙ инде, өҫтәлебеҙ һыйҙан һығылып тормаһа, күңелебеҙ булмай.

Шул тиклем тәмле һәм туҡлыҡлы ризыҡтар яратабыҙ беҙ. Аш-һыуыбыҙҙы бүтән милләт кешеләре лә маҡтай. Тик... Артыҡ калориялы шул беҙҙең аҙыҡ. Бәлештәрҙән, ҡаҙылыҡтан, һалмалы аштан, бал-майҙан, ҡоймаҡтан бер аҙ арынырға ваҡыт түгелме икән? Саҡ ҡынамы, күберәкме аҡһымлы ризыҡтарға, йәшелсә-емешкә күсә барырға кәрәк кеүек. Юғиһә инсульт, инфаркт, атеросклероз кеүек сирҙәрҙән иртә китеү осраҡтары йышайып бара. Хәйер... Мин үҙем һис кенә лә йәшелсә менән генә мөрхәтһенә алмайым. Гормонлы дарыуҙар арҡаһында, ризыҡ калориялы булғанға күрә һимереү сире менән дә көрәшәм. Тик көрәш гел минең еңелеү менән тамамлана.

Башҡортостан ауылдарының архитектураһы ла үҙенсәлекле. Шуныһы ҡыҙыҡ, татар ауылдарының стиле үҙенә бер төрлө, башҡорт ауылдарыныҡы — үҙенә. Әммә икеһендә лә зауыҡ, тыуған, торған ергә ихтирам һәм мөхәббәт сағылышы бар.

Башҡортостандың боронғо сәйәхәтселәр һәм йылъяҙмасылар тарафынан Ҡалалар иле тип йөрөтөлөүе хәҙерге тарихсылар тарафынан оҙаҡ ваҡыттар телгә алынманы. Мәғлүмәттәр матбуғат баҫмаларына килеп ингәс, Алексей Шушпанов кеүек журналист, Иванов кеүек тарихсылар күтәрелеп-бәрелергә тотондо. Имештер, башҡорттарҙың бәҫе һәм мәртәбәһен арттырып ебәреү түгелме был? Алексей Шушпанов уны “Аквариум эсендәге асыш” тип баһаланы. Әммә тарихты, бигерәк тә археологияны юйып ташлап булмай. 70-се йылдарҙа Өфө ҡалаһына рус стрелецтары XVI быуатта ғына нигеҙ һалған, тигән фекер нығынып киткәйне.

Рәсәй өсөн дә, уның ҡайһы бер шовинист тарихсылары өсөн дә был ҡулай ине. Беҙ иһә, һуңғы 3—4 быуат эсендә үҙ мәртәбәбеҙ һәм бойондороҡһоҙлоғобоҙ өсөн баш күтәрә-күтәрә миктәгән, шуға ла ҡайһы бер ғәҙелһеҙлектәргә күнергә өйрәнеберәк барған милләт булараҡ, был ысынбарлыҡҡа тура килмәгән фактты ла сабырлыҡ менән ҡабул иттек. Ә бит был уйҙырмаларҙы инҡар итеүсе тарихи сығанаҡтар ул осорҙа ла билдәле була. Мәшәүерәкме икән беҙ, ҡурҡағыраҡтырмы, үҙебеҙҙең ҡаҙаныштар, донъя мәҙәниәтенә индергән өлөшөбөҙ хаҡында ауыҙ асып һөйләүҙән тыйылабыҙ. Академик Нияз Мәжитовтың тырышлығы һәм фиҙакәрлеге менән нисәмә-нисә ҡатлам аша алдыбыҙға килеп баҫҡан археология ҡомартҡыһының Рәсәй территорияһындағы иң боронғо ҡалаларҙың береһе булыуы хаҡында бөтә ил белде. Рәсәй Фәндәр академияһы профессоры, тарих фәндәре докторы И.Л.Ҡызласов, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, тарих фәндәре докторы Ш.Н.Әмиров, шул уҡ институт хеҙмәткәре И.А.Сапрыкина һәм Башҡортостан ғалимдары ҡатнашлығындағы Эксперт советы 2007 йылдың 17—18 авгусында Башҡортостан Республикаһының саҡырыуы буйынса Өфөлә булғайны. Эксперт советы Өфө-II ҡаласығының ғилми әһәмиәтен билдәләү өсөн археологик ҡаҙылманы һәм унда табылған ҡомартҡыларҙы ҡараны.

Эксперттар шундай фекергә килде:

1. Өфө-II ҡаласығы — тиңе булмаған археологик ҡомартҡы, быны соҡоноуҙар алып барылған ерҙән алыҫ булмаған зыярат та иҫбатлай. Ҡаласыҡтың 4 метр тәрәнлектә булыуы уны Көнсығыш Европалағы бүтән оҡшаш ҡомартҡыларҙан айырып тора. Был урында тормоштоң өҙлөкһөҙ дауам итеүен ер ҡатламдарының бик боронғо (I—II быуаттар) булыуы иҫбат итә. Ҡатламдар культураһы яҡшы һаҡланған. Ҡомартҡы стратиграфияһы осорҙарҙы, ҡаланың үҙенең һәм хәрби оборона ҡоролмалары планын хронологик тәртиптә күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә.

2. Ҡаҙып сығарылған археологик объекттар монументаль архитектура ҡоролмалары кимәлендә. Ҡаланың хәрби ҡәлғәһе иртәрәк осорҙа, алдан эшләнгән проект буйынса төҙөлгән һәм бында хәрби-фортификация мәктәбе булғанлығын дәлилләй. Боронғоса, ҡалыпҡа балсыҡ ҡойолоп, төҙөлөш ҡанундарына таянып һалынған. Уның эске яғы ҡулайлаштырып йыһазландырылған булған. Ағас конструкциялар ҙа, балсыҡлы материал да яҡшы һаҡланғанлыҡтан, Урал һәм Волга буйы халыҡтарына хас һауыт-һабанан тыш, Урта Азия, Ҡавказ һәм бүтән төбәктәрҙән килтерелгән һауыт-һаба ла бар. Быяла һәм ярым ҡиммәтле таштарҙан яһалған әйберҙәр Сириянан, Византия империяһынан һәм Балтик буйынан килтерелгән. Иртә һәм һуңғы осор урта быуаттарға хас ювелир биҙәнгестәр — алтын, көмөш, бронзанан. Иртә Византия һәм Алтын Урҙа тәңкәләре лә етерлек. Ҡалала ювелир эштәре менән булышҡандар, күрәһең, алтын киҫәктәре, эҫкәк кеүек ҡулланмалар табылған. Һөйәкте ырыу, шымартыу оҫталығына эйә булыуҙары күренә. Һөйәктән эшләнгән әйберҙәр шул хаҡта һөйләй, архитектура-төҙөлөш деталдәрен дә күҙалларға мөмкин.

3. Ҡаҙыныу эштәре барышында табылған археологик коллекцияны ҡиммәтле һәм ҡара металдан, һөйәктән, быяланан, балсыҡтан яһалған әйберҙәр тәшкил итә.

Шулай итеп, Эксперт советы Өфө-II ҡаласығының ғилми һәм мәҙәни әһәмиәте бәхәсһеҙ, тигән фекергә килде. Өфө-II ҡалаһы быуаттар һуҙымында

Урал-Волга төбәгенең эре административ, сауҙа, һөнәрселек үҙәге булған. Бында урындың уңайлы, культура ҡатламдарының яҡшы һаҡланыуы, бай археологик табыштар булыу арҡаһында тотош тарихи процесс үҙенсәлектәрен баһаларға мөмкин.

Шул рәүешле, ҡаласыҡ Башҡортостан һәм Көньяҡ Урал өсөн генә түгел, тотош Көнсығыштың ҡиммәтле тарихи сығанағы, фәнни яҡтан ҙур әһәмиәткә эйә ҡомартҡы тип баһаланырға хаҡлы.

Тағы ла кемдең ризалығын алырға теләй һуң профессор Иванов менән журналист Шушпанов? Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламдарын ентекле өйрәнеү Рәсәй фәненең етди археологик объектына әүерелергә тейеш түгелме ни?

Башҡортостан туристик яҡтан әһәмиәтле булһын өсөн, беҙҙең үҙ "бренд"ыбыҙ булырға тейеш, тип баш вата йәш менеджерҙар. Бер ҡатлыраҡ кешеләр бал, башҡорт шәле, ҡымыҙ, ҡаҙылыҡ менән арбарға кәрәк туристарҙы, тигән фекерҙәр әйтә. Дөрөҫ, беҙҙең ризыҡтарҙың да тиңе юҡ ул. Әммә ана шул телгә алынған һый-хөрмәт Өфө-II ҡаласығы музейы янында тәҡдим ителһә, мәртәбәбеҙ юғарыраҡ булыр ине бит.

Их, яйыраҡ халыҡ беҙ. Ә бит ниндәйен дә тәрән мәғәнәле "Урал батыр" эпосы менән дә шулай булды. Эпос менән һәр башҡорт мәктәп дәреслегендә ҡыҫҡаса ғына бирелгән текст аша таныш ине. Оҙаҡ йылдар беҙ уға миф, әкиәт кеүегерәк ҡараныҡ. Ә 90-сы йылдарҙа Салауат Ғәлләмов сит илдәрҙә йөрөп-йөрөп ҡайтып төштө лә, "Урал батыр" эпосының йәше 4 мең йыл ул, тип, йәмәғәтселекте, ғилми даирәне шаулатып ебәрҙе. Уның был мәғлүмәтен ҡабул итеүселәр ҙә, ҡаршы сығыусылар ҙа етерлек ине. Әммә шуныһы мөһим — был ҡыйыу фекер "Урал батыр" эпосына иғтибарҙы йүнәлтергә, уға текләберәк ҡарарға мәжбүр итте.

Халыҡтарҙың донъя төҙөлөшөн күҙаллауы, яҡшылыҡ менән яуызлыҡҡа мөнәсәбәте, кешенең ерҙәге урыны хаҡында фекер йөрөтөүе күп төрлө һәм үҙенсәлекле булыуы хәҙер бер кемгә лә сер түгел.

Билдәле булыуынса, башҡорттар этник, хатта раса йәһәтенән бик ҡатмарлы тарихи юл үткән, төрлө ҡәүемдәр ҡушылыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән халыҡ. Уларҙың бер өлөшө төркиҙәргә ҡараһа, ҡайһылыр бер ҡатламы фин-уғырҙарға, күпмеһелер байтаҡҡа боронғораҡ фарсыларға (ирандарға) ҡарай. Салауат Ғәлләмов иһә халҡыбыҙҙың иран-фарсы нигеҙҙәрен күҙаллап, "Урал батыр" эпосының тәүтөркиҙәр ҙә, фин-уғырҙар ҙа башҡорт йәки айырым халыҡ булып формалашып бөтмәгән саҡҡа барып тоташҡан тамырҙарын юллай.

Бынан йөҙ йылдан ашыуыраҡ элек немец ғалимы Отто Группе "Көнсығыш диндәренә мөнәсәбәте булған грек культтары һәм мифтары" тигән китап баҫтырып сығара. Ошо китабында ғалим ул саҡта билдәле булған әҙәбиәткә таянып, грек дине һәм мифологияһына көнсығыш мифологияһының йоғонтоһон иҫбатлай. Группе, бүтән авторҙарҙан тыш, грек авторҙарының да фекерҙәренә таяна. Улар ҙа грек аллаларының көнсығыш сығышлы булыуын билдәләй. Был XIX быуат. Европа державаларының Көнсығышҡа көслө экспансияһы осоро. Ғалимдың көнсығыш һәм көнбайыш мәҙәниәттәренең берҙәмлеге хаҡында һөйләгән был китабы һалҡын ҡабул ителә. Салауат Ғәлләмовтың "Урал батыр"ға нисә йәш" китабы ла һалҡын ҡабул ителде. Уны 1997 йылда роман-газета формаһында китап нәшриәтендә баҫтырып

сығарыуға миңә лә күп көс һалырға тура килде. Башта Салауат Абдрахман улының яҙмаларын башҡортсаға тәржемә итеп, “Ағиҙел” журналында баҫтырыу, аҙаҡ айырым нәшер итеүгә әҙерләү, машинкала баҫыу минең елкәгә төштө. Уның ҡарауы, был башланғыс эҙһеҙ ҡалманы, эпосыбыҙға иғтибар артҡандан-арта барып, хәҙер ул бер нисә сит телдәргә тәржемә ителде. Уны төрлө телдәрҙә яттан һөйләү конкурстары традицияға әүерелде.

Беҙ, эйе, башҡорттар. Тарихсы Николай Гумилев сығышыбыҙҙы төркиҙәргә алып барып тоташтыра. “Небесные тюрки” — күктең төркиҙәре, моғайын, арий сығышлы булғандыр.

Ҡешелек тарихы ярайһы өйрәнелгән кеүек. Унда, хәйер, ғәҙелһеҙлектәр аҙ түгел. Европа, Яҡын Көнсығыш тарихы XX быуат башында ентекле күҙәтелһә лә, Сыңғыҙ ханға тиклем Үҙәк Азия далаларында ғүмер итеп, үҙ дәүләтен төҙөүгә өлгәшкән һундар һәм боронғо төркиҙәрҙең яҙмышы хрестоматик дәреслектәрҙән ситтә ҡала килде.

VI быуатта төрки ҡағанаттың сиктәре көнбайыштан — Византия, көньяҡтан — Фарсы һәм Һиндостан, ә көнсығыштан Ҡытай менән сикләнгән була. Ҡытайҙар ҙа, Византия ла Константинополь баҙарында сауҙа аралашсыһы булған төркиҙәр талабына ҡолаҡ һалырға мәжбүр көн итә. Ана шул баҙарҙа боронғо Өфө-II ҡалаһында йәшәп, Ағиҙел, Итил йылғалары, Каспий диңгеҙе аша тоҙ, балыҡ, тиреләр, ювелир биҙәүестәр менән сауҙа иткән беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа йөрөп ятҡан бит. Ебәк, бәрхәт, аҡсамит туҡымалар, затлы һауыт-һаба шул ҙур баҙарҙан килтерелгәндер Башҡорт ҡалаһына.

604 йылда Көнсығыш һәм Көнбайыш төрки ҡағанаттар тарҡала. 745 йылдар тирәһендә төркиҙәр юҡҡа сыға. Халыҡтың бер өлөшө даланың яңы хужалары — уйғырҙар ҡулына күсә. Икенсеһе Ҡытай империяһы эсенә инеп юғала. Билге хандың тол ҡатыны По-бег етәкләй уларҙы. По-бегка ҡытайҙар юғары титул бирә. Кешеләрҙе һаҡлап ҡалһа ла, халҡын һаҡлап ҡала алмай ханбикә, төркиҙәр табғылар эсенә ҡом кеүек һеңә. Дөрөҫ, 756 йылда Таң династияһы императорына ҡаршы баш күтәреп ҡарайҙар, әммә ҡытайҙар тарафынан тураҡланалар ғына....

Донъя аренаһында төрки исеме һаҡланып ҡала барыбер һәм тел ғаиләһен билдәләүсе терминға әүерелә. Атама эсенә VI—VII быуаттарҙа ҡағанат составында булмаған халыҡтар ҙа индерелә. Әйтәйек, төркмәндәр, османдар, әзербайжандар, ҡағанаттың дошмандары һаналған яҡуттарҙың ата-бабаһы ҡурыҡандар менән ҡырғыҙҙар, хакастар, ҡағанат ойошҡанға тиклем үк формалашҡан балҡар, сыуаш, башҡорттар ҙа хәҙер төрки тел ғаиләһенә ҡарай.

Күктең төркиҙәре, арийҙар. Улар тыуҙырған тәғлимәт, тәүдиндәр барлыҡҡа килтергән әҙәп-әхлаҡ нормалары, Ер менән Күк мөнәсәбәттәре, тәбиғәткә булған ҡараш ҡанундары — былар бөтәһе лә беҙҙең ҡаҙаныштарыбыҙ һәм исламғаса тиклемге үткән юлыбыҙ. Уларҙан баш тартып буламы? Мөмкин. Әммә арийҙарҙың рухи ҡанундары тәңреселек, ислам диндәренең нигеҙҙәрен тәшкил иткән кеүек күренә миңә. Ул тәғлимәттең ҡайһы берҙәрен генә — ошо яҙмаларымды уҡыусыларға тәҡдим итәм.

## Арийҙарҙың ҡанундары

*Уралыбыҙ — изге оранбыҙ,*
*Дүрт тарафта төрки туғаныбыҙ.*
*Рухыбыҙҙың нуры — сөм Күктә,*
*Ырыҫыбыҙ — изге төйәктә.*
*Атаң һинең — ҡара ер,*
*Әсәң һинең — ҡара ер.*
*Ризыҡтарың бөттө ниһә,*
*Ятыр ерең — ҡара ер.*

*Башҡорт халыҡ фольклорынан*

Был ҡанундарҙы мин немец ғалимы Ф.Ницшеның "Так сказал Заратустра" әҫәренән уҡып рухланғайным. Билдәле булыуынса, зороастризм диненә нигеҙ Башҡортостан төбәгендә һалына һәм уға нигеҙ һалыусы Заратустра, ә беҙҙең телдә Зардуш, Иран тарафтарына сығып китә. Иранда ул бер осор дәүләт дине кимәленә күтәрелә. Беҙҙә иһә зороастризм таралыу ала алмай. Уны арийҙарҙың ҡанундары тип атаусылар ҙа бар. Ә арийҙар шул уҡ башҡорттар бит инде. Шуларҙың бик фәһемле күренгән ҡайһы берҙәрен уҡыусыларға ла еткергем килде.

...Аҡыл эйәләре ошолай ти: "Фанилыҡ менән рух мәңгелеге ике ҡәлғәгә оҡшаған: береһен яулап алып була, икенсеһен яулау мөмкин түгел".

Аҡыл эйәһе аҡыл рухына һорау бирә: "Тәнде һәм йәнде һаҡлау өсөн донъяла нимә яҡшы?"

"Кешегә тәтер бәхеттең иң ҙуры — аҡыл. Сөнки аҡыл ғына ерҙә йәшәүгә идара итә, рух бөтөнлөгө иһә аҡыл аша килә. Бөтә тереклекте һәм ғаләмде барлыҡҡа килтергән Ахура Мазда йәшәүгә аҡыл төшөнсәһен һалған. Ерҙәге тормош та, рухиәт тә аҡыл аша идара ителә".

— Тән сәләмәтлеген күңелде ҡыйратмай һәм күңел бөтөнлөгөн тәнгә зыян килтермәй нисек һаҡлап була?

— Үҙеңдән кесене — тиң, тиңде — үҙеңдән юғары күр. Үҙеңдән юғарыға — юлбашсы, юлбашсыны етәксе тип таны.

Юлбашсы алдында тыңлаусан, дөрөҫлөктө һөйләүсән бул.

Кемдер һиңә ғәйеп таҡһа, сәбәләнмә, үҙеңде баҫалҡы, күндәм, сабыр тот.

Кешене ғәйепләргә ашыҡма, ғәйепләүең үҙ башыңа төшөр. Кешене нахаҡтан ғәйепләү һәм ошаҡ ташыу сихырҙан да ғазаплыраҡ булып кире ҡайтыр. Тамуҡҡа эләгә ҡалһаң, алдыңа сығыр ғазаптарҙан былай, ҡылған нахаҡ эштәрең, аждаһа булып, артыңдан килеп ташланып язалар.

Нәфсеңә баш бул. Ҡомһоҙлоҡ тоҙағына эләкһәң, йәшәүҙең түбән һәм йәмен юғалтыуың, рухи хазиналарға битараф ҡалыуың бар.

Яуызлыҡтың ҡоло булма. Яуыз кеше үҙенең ерҙәге бурысын да, изгелек тойғоһон да, доғаларҙы ла онота. Уйына енәйәт, гонаһ теләге оялай, усал кеше ҡараңғылыҡ улы Аңра Маньюға оҡшай башлай.

Тынғыһыҙлыҡ менән интекмә. Тынғыһыҙ кеше донъялыҡ һәм рухилыҡ тәмен татыуҙан мәхрүм. Күңеле лә, тәне лә тарығыусан була.

Берәүҙән дә көнләшмә. Көнсөл булмаһаң, йәшәү тәмен юғалтмаҫһың.

Яҙмышыңдан риза булырға өйрән. Юғиһә гонаһлы булырһың.

Йәшәүҙең йәме дан, билдәлелек һәм бүтәндәрҙән юғарыраҡ тороу, кешенең талаптары һәм ихтыярына бәйле түгел. Ул — яҙмыш һәм изгеләр ихтыяры.

Ялҡауланма. Изге эштәр һәм һиңә йөкмәтелгән бурыс үтәлмәй ҡалмаһын.

Мәртәбәһен белгән, характеры булғанды ғына ҡатынлыҡҡа ал, сөнки яҡшы даны булған ҡатын ғына донъя көтөүгә ҡулай.

Юҡ-бар ғәйбәт һөйләүҙән тыйыл. Тәңренең күңеле һинән ҡайтмаһын.

Ығы-зығынан азат бул, мал-тыуарыңа, ҡош-ҡортоңа, бала-сағаңа ҡаза килмәҫ.

Теләнселәп байлыҡ йыйма. Көндәлек хеҙмәттән күңелең ҡайтыр.

Ризыҡты үҙ көсө менән тапмай, кешегә һалышып йәшәгән кеше, ҡулына кеше башын алып, шуның мейеһен имгән бәндәгә оҡшаш.

Кеше ҡатынына ымһынма. Тормош етешлегеңә, тәнеңә, йәнеңә хилафлыҡ килер.

Дошмандарың менән ғәҙел көрәш. Хәрәмләшмә.

Бүтән дуҫтарың менән кәңәшләшмәй тороп, дуҫ булған кешеңдән баш тартма. Яуыз кеше менән әшнә булмаҫҡа тырыш.

Һаран кеше менән эшмәкәрлек башлама, ундай кешегә етәкселек вазифаһын тапшырма. Нахаҡ ғәйеп ташларҙай кеше менән түрәләрҙең ишеген ҡаҡма. Яманаты сыҡҡан кеше менән бәйләнешкә инмә. Наҙан кеше менән берлектә эшкә тотонма. Эскеселәр менән бер юлдан йөрөмә. Холоҡһоҙ кешенән әжер алма.

Ғүмереңде хәҡиҡәтте асыҡлауға бағышла, был йәһәттән өлгөр булыуың зарур. Көтөлмәгән ҡазаларҙан аҡыл ғына аралар. Дан-шөһрәт һәм күңел бөтөнлөгөн һаҡлау юлындағы иң ҙур ярҙамсы — йомартлығың.

Эшем уңһын, ғәҙеллек еңһен тиһәң, аҡылға таян.

Ҡанундарға таянып, Ахура Маздаға ышанып йәшәүсе кешенең төп ҡиблаһы — хәҡиҡәт.

Ниәт иткән эшең барып сыҡһын тиһәң, егәрле бул, эшеңдән файҙа күрергә теләһәң, разый була белеү зарур.

Ҡыйынлыҡтарҙан, ҡыйралыштарҙан, тәртипһеҙлектән ҡотолоу юлы берәү генә. Ул — хеҙмәт.

Эшеңде эшләшеүселәргә рәхмәт әйтә бел, йомартлыҡ күрһәт.

Сәләмәт булғың килһә, самалап аша һәм гел хәрәкәттә бул.

Үҙ тиңең һәм милләттәшең менән итәғәтле мөнәсәбәттә бул.

Көн һайын донъя, уны яралтыусы Ахура Мазда һәм гел генә уның ниәттәренә ҡаршы тороусы Аңра Манью хаҡында уйланырға тырыш.

Балбалдарға табыныуҙан, иблискә хеҙмәт итеүҙән тыйыл.

Изгелек ҡыл, ул үҙеңә әйләнеп ҡайтыр.

Маҡтағандарына алданма. Рухи донъяла ерҙәге дәрәжә ярҙам итмәй.

Зардушҡа һорау бирәләр:

— Ахура Мазда тереклекте һәм ғаләмде нисек ижад иткән?

— Ахура Мазда тереклекте, тәңре һәм аҡыл рухын үҙ яҡтылығынан һәм Мәңгелек (Абсолют) фатихаһынан яралтҡан. Мәңгелектең сиге юҡ. Ватылмай.

Ҡыйралмай. Һыҙланмай. Уның өсөн һыуһау ҙа, асығыу ҙа ят. Уны бер кем дә үҙ мәнфәғәтенә буйһондора алмай. Ерҙә ғүмер иткән һәр кеше һәм тереклектең иңенә төшкән яуызлыҡ та, изгелек тә ете планета һәм ун ике йондоҙлоҡтан төшә.

— Яуызлыҡ менән изгелек араһында ҡасан да булһа килешеү барлыҡҡа киләсәкме?

— Был мөмкин түгел. Донъяла бөтә нәмә үҙгәреүсән. Яҡшылыҡ менән яуызлыҡтың ғына асылы үҙгәрмәй. Тәбиғи яҡшылыҡ — насарлыҡҡа, тәбиғи яуызлыҡ изгелеккә әүерелмәй.

— Ни өсөн бөтә тереклек үҙ асылы хаҡында мәғлүмәт менән яралтыла, ә кешеләр, бер ниндәй ҙә күрһәтмә бирелмәгәнлектән, кеше сифатына тиң булырҙай мәғлүмәттән мәхрүм?

— Тәү кешеләр аҡылы камил итеп яратылған булған. Яҡшылыҡ менән яманлыҡтың асылы улар өсөн сер булмаған. Изгелек өсөн баһаны ла, яуызлыҡ өсөн язаны ла улар үҙ күҙҙәре менән күрер булған. Ләкин һуңыраҡ Аңра Маныю изгелек баһаһын да, гонаһ өсөн язаны ла кеше күҙенән йәшерә. Шул арҡала донъяла күп һанлы дини йолалар барлыҡҡа килә. Кеше үҙенең ерҙәге бурысын, тәғәйенләнешен аңламауы сәбәпле, уға кем ниндәй йола-ғәҙәт өйрәтһә, шул яҡшы, тип ҡабул итә башлай.

— Кеше ейгән тәғәмдең, кейгән кейемдең ҡайһыһы иң һәйбәте?

— Кеше ейгән ризыҡтың иң яҡшыһы — кәзә һөтө. Һөт эскән кеше сәләмәт һәм көслө була, нәҫел дауамы ла һәйбәт була.

Бөртөклөләрҙән иң бөйөгө — бойҙай. “Авеста”ла ул бөртөклөләрҙең батшаһы тип атала.

Емештәрҙең иң ҡиммәтлеһе — хөрмә менән груша.

Эсемлектәрҙән шарапҡа килгәндә, ул кешелә яҡшы сифаттарҙы ла, яуыз ҡылыҡтарҙы ла аса. Кешенең яҡшымы-насармы икәнлеге асыулы сағында асыҡлана, аҡылын тәртипһеҙ теләктәре аша баһалап була. Асыулы кеше асыуын яҡшылыҡ менән баҫа, нәфсеһе ҡуҙғалһа, ул уны аҡылы менән йүгәнләй. Шарап эсеү теләге тыуһа, уны сабырлығы менән тыя.

Изге күңелле кеше шарап эсһә, алтын һәм көмөш сынаяҡҡа оҡшай, эсенә шыйыҡса һалынғандан төҫө үҙгәрмәй. Насар уйлы кеше шарап эсһә, үҙен әллә кем итеп тоя башлай. Эргәһендәге кешеләргә бәйләнә, тауыш сығара, әҙәпһеҙ ҡылана. Кешеләрҙән үҙен өҫтөн ҡуя. Тыныслыҡты боҙа, ыҙғыш тыуҙыра. Ҡатынын, хеҙмәтселәрен рәнйетә.

Шарап эсеүҙә сама белеү кәрәк. Самалап эскәндә, шарап ризыҡты эшкәртеүгә булышлыҡ итә, күңелгә ут өҫтәй, аңлауҙы, аңды, ҡанды етеҙләндерә, арыуҙы бөтөрә, биткә алһыулыҡ йүгертә, күңелде ҡырған нәмәләрҙе оноттора, улар урынын ыңғай тойғолар биләй. Һиҙгерлеге, телмәре яҡшыра, башҡараһы эшен тиҙерәк эшләй. Йоҡоһо татлы була.

Шарап эсеүҙә сама белмәүселәрҙең кире яҡтары күбәйә. Аҡылы һайыға, аңы, уй кимәле, нәҫел орлоғо, ҡаны кәмей. Бауырына зыян килә, шул арҡала битенең төҫө уңа, көс-ғәйрәте кәмей. Изгеләрҙе хөрмәт итеү онотола, күҙе, телмәре насарая, ишетеү һәләте кәмей. Һөҙөмтәлә — ғаиләһе лә, үҙе лә бәхетһеҙ.

Кейемгә килгәндә, ебәк кейем — тәнгә, мамыҡ кейем йәнгә рәхәтлек бирә. Ебәкте бит зарарлы ҡарышлауыҡ иләй, ә мамыҡ һыу менән туҡлана, ерҙән һут ала.

— Ҡеше үҙенең ҡул көсө менән донъялыҡта байлыҡ туплай аламы?

— Маңлайына яҙылмағанды бәндә, ниндәй генә көс һалып тырышһа ла, ҡулына төшөрә алмай. Ерҙә һалынған көсө ерҙә йәшәгәндә уңышҡа өлгәштермәһә лә, Сират күперендәге үлсәүҙә булышлыҡ итер.

— Яҙмыш менән аҡыл, белем ярҙамында көрәшеп буламы?

— Аҡылың менән көсөң ни рәүешле булһа ла, яҙмышты үҙгәртеп булмай. Яҙмыш тыуғанда уҡ яҙыла, Хоҙай ҡөҙрәте кеше өсөн өҫтәлмә бүләк.

— Нимә иң көслө? Ҡем иң етеҙе? Ҡем иң бәхетлеһе? Ҡем иң бәхетһеҙе?

— Һәммәбеҙҙе лә ярлыҡаусы — Ахура Мазда бар. Ул туғыҙ мең йыл буйы үҙе ижад иткәнде Аңра Маньюның ҡыйратыуын, туҙҙырыуын күҙәтә. Әммә уны юҡ итергә ашыҡмай. Һаман ярлыҡай килә.

Иң көслөһө — Күк.

Ҡеше аҡылы — иң етеҙе.

Күңел рухы — иң ҙур бәхет.

Күңеле бысранған кеше — бәхетһеҙ.

— Аңра Манью ҡыйрата аламаҫлыҡ көс бармы?

— Аҡылы теүәл, рухы ныҡ кешенең күңелен ҡыйратып булмай.

— Руханиҙарҙың ниндәй етешһеҙлеге бар? Хәрбиҙәргә, ер эшкәртеүселәргә, һөнәрселәргә нимә етешмәй?

— Руханиҙарҙың етешһеҙлеге — дин йолаларын теүәл үтәмәүҙә. Нәфсегә бирелеү, сауҙагәрлек, ваҡ-төйәккә алданыу. Хәрбиҙәр етешһеҙлеге — кешене үҙ ихтыярына буйһондороу, ҡыҙыу ҡанлылыҡ, мин-минлек, шәфҡәтһеҙлек. Оҫталарҙың етешһеҙлеге — ышанмаусанлыҡ, маҡтағанды көҫәү, урынлы-урынһыҙға доғалар мығырлау, ҡәнәғәтһеҙлек, эскелек, һүгенеү.

— Бойомға ашырыуы күп көс талап итмәгән изгенән дә изге эш нимәнән ғибәрәт?

— Донъялыҡтан разый, рәхмәтле булыу һәм һәммә кешеләргә, заманаға бәхет теләү. Бөтә изгелектән дә изгелеклерәк, бер ҡыйынлыҡһыҙ бойомға ашырып булған яҡшылыҡ ана шул булыр.

Ғалимдар “Авеста”ның беҙҙең эраға тиклем II мең йыллыҡтар тирәһендә ижад ителеүен билдәләй. “Авеста” ирандарҙың тәү төйәген ошолай тип һүрәтләй: “Иң тәүге, иң гүзәл ил итеп мин, Ахура Мазда, Даит (Яйыҡ) йылғаһы буйында Ариэна Вэджа илен булдырҙым, бының өсөн мең дейеү ебәргән яуыз ерән йыланды һәм ҡышты ҡыуҙым. Бында ҡыш 10 ай, йәй ике ай була” (“Авеста”. Видеват, 1, 2).

Даит (Яйыҡ) буйҙарынан китеп, Виштапс (Гуштасп) батшаға килеп һыйынған Зардуштың (Заратустра) дини тәғлимәтен ирандар беҙҙең эраға тиклем X—XI быуаттарҙа ғына ҡабул итә һәм зороастризм Ахименедтар династияһы осоронда (беҙҙең эраға тиклем XI—V быуаттарҙа) ғына дәүләт диненә әүерелә.

“Авеста” арийҙарҙы “айрайанем ваджо, айранем-бадж” тип атай. Был “айырым башҡорт иле” тигән төшөнсәгә нигеҙләнгән һүҙ булһа кәрәк.

Арий ҡанундары заманы өсөн йәшәү ҡағиҙәһе була ул. Уларҙың ҡиммәте бөгөн дә баһалап бөткөһөҙ. Ҡанундар Зардуш бәйғәмбәрҙең (Заратустра) Аҡыл һәм Яҡтылыҡ Хоҙайы Ахура Мазда менән әңгәмәһенә ҡоролған. Былар хаҡлы рәүештә милләтебеҙҙең рухи ҡомартҡыһы тип баһаланыуға лайыҡ.

## Ижади мөхит

*...Аҡ ҡағыҙға — Йыһан тәҙрәһенә*
*Күҙең төшөү етә әҙ генә,*
*Олъғашаһың ниндәй сөңгөлдәргә....*
*Ә баҫҡысың ябай —*
*Һүҙ генә...*

Ижад — фекер һәм күңел азатлығы ул. Донъяла булмаған, әммә булыуы ихтимал кисерештәр һәм фекерҙе ижадсы тик күңеле һәм зиһененә, намыҫына таянып ҡына бар ҡыла. Уның бүтән ҡоралы юҡ.

Ижад азатлығына ынтылыш ижадсының эске инстинктына бәйле. Был юғары кимәлдәге инстинкт шағир, философ, композитор һәм рәссам өсөн тәбиғи халәт. Ижадсы өсөн азатлыҡ тойғоһо ғүмерҙең үҙенән дә ҡиммәтлерәк.

Яҙыусының әҫәрҙәре, улар тик “обыватель” зауығына ғына тәғәйенләнгән булмаһа, уҡыусыларға йыш осраҡта аңлашылып бөтмәй. Сөнки автор аңы һәм намыҫы яралтҡан фекерен һүҙ аша ҡағыҙға төшөрә. Ә фекер логикаһының нескәлектәрен үҙ аңында сарламаған уҡыусы фекерҙе тик әҙер һүҙ аша ғына үҙләштереп маташа. Ижадсы, ниндәй генә өлкәлә булмаһын, конкрет замананың таныулы күренештәренә лә, донъя мәҙәниәте иләгенән үтеп, мәңгелек тип танылған төшөнсәләргә лә мөрәжәғәт итә. Ана шуларҙан тайпылмаған әҫәрҙәр классика тип атала ла инде.

Һәр замандың үҙ зауығы. Быуаттар буйы бәҫен юғалтмаған әҙәбиәт, оперАлар, һынлы сәнғәт өлгөләре булған кеүек, бөгөн йәшәгән кешеләр талабын ҡәнғәтләндереү менән сикләнгән әҙәбиәт тә, йырҙар ҙа етерлек. Хөртмө был? Минеңсә, уларҙың да халыҡҡа еткерелергә хоҡуғы бар.

Скульптор М.Антокольскийҙың “Мефистофель” тигән һыны бар. Ул Санкт-Петербургтың Рус музейында тора. Мәрмәрҙән яһалған. Мефистофель уң аяғын сәнсеп ултырған, ике ҡулын тубығының өҫтөнә һалған, өҫтәүенә, эйәге менән тубығында ятҡан ҡулдарына терәлгән. Һын үҙе лә, йөҙ-киәфәте лә ҡаҡса, ҡарашы ярайһы шомло. Ҡыҫҡаһы, ҡарап тороуға әллә ни эстетик тойғолар уятмай. Шөкәтһеҙлеге ытырғандыра һәм тетрәндерә. Билдәле ки, ытырғаныу, өшәнеү, шатлыҡ кисереү, тетрәнеү тойғолары катарсис кисертә. Ҡатарсис иһә кешенең тойғоларын һәм уйын сарлай. Әйткәндәй, ни өсөн шәрә был Мефистофель?

Ундай һорауҙы Антокольскийға ла бирәләр.

— Әгәр һынды кейендерһәң, — тип яуап бирә скульптор, — кейеме образды конкрет заманға бәйләр ине, был иһә минең идеяны тарайта.

Тимәк, Мефистофель Гёте заманының ғына образы түгел, ул әле лә беҙҙең арала.

Лев Толстойҙың “Һуғыш һәм солох” тигән донъя мәҙәниәте хазиналығына ингән романы яҙыусы үҙе йәшәгән заман хаҡында. Әммә ундағы милли колорит, мөхәббәт һәм нәфрәт, тоғролоҡ һәм хыянат, кеше мөнәсәбәттәре, бәхет һәм хәсрәт, патриотлыҡ, һуғыштың кеше донъяһына һәм тотош донъяға (мирға) йоғонтоһо хаҡындағы темалар, Мефистофель образындағы кеүек, шәп-шәрә, улар бына нисә быуаттар үтһә лә, урыҫтың ғына түгел, тотош кешелектең аңдарға, төшөнөргә теләгән даирәһе булыу сәбәпле, әле лә беҙҙең аңыбыҙ һәм йәнебеҙҙә хис-тойғолар аша катарсис уята түгелме?

Беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙәге Мостай Кәримдең милләтебеҙгә хас һәм мәңгелек бизмәнендә һыналған менталитетлы геройҙары, Флорид Бүләковтың ваҡыт һынаған

өҫтөнлөктәр солғанышында ғүмер иткән образдары, Ноғман Мусин, Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина әҫәрҙәрендәге дөйөм кешелеккә хас ҡиммәттәр бөгөн дә бәҫен юғалтмай.

Китапҡа яҙылғандар тормошҡа оҡшаш булһа ла, йәшәйеш — үҙенсәлекле донъя. Тормош мәғәнәһен китаптар ярҙамында аңғарһаҡ та, тормошто китапта яҙылғанса ҡороп булмайҙыр. Ғүмеребеҙ эсендә тик беҙҙең яҙмышҡа ғына яҙған һынауҙарҙы кисәбеҙ, беҙгә генә осраған ваҡиғаларға тап булабыҙ, серҙәр асабыҙ һәм табышюғалтыуҙарға юлығабыҙ. Үҙебеҙ кисергәндәрҙән һабаҡ, фәһем алабыҙ. Ҡайһы саҡта күтәрә алмаҫлыҡ ауырлыҡтар, фажиғәләргә лә тарыйбыҙ. Иң ғәжәбе шунда, бындай хәлдәрҙән беҙҙе йыш осраҡта ниндәйҙер эскеме, тышҡымы ҡөҙрәт аралап та ала.

Философ Шамфор, яҙған китаптары, мәҡәләләре арҡаһында власть органдары уны ҡулға алырға йыйынғас, бер минутҡа ғына икенсе бүлмәгә сығып инергә рөхсәт ала һәм шунда үҙ-үҙенә ата. Тере ҡала. Оҙаҡ язаланып ята. Пуля урыны эренләй. Үлер алдынан ул шундай һүҙҙәр әйтә: “Я ухожу наконец из этого мира, где человеческое сердце должно или разорваться, или оледенеть”. Минең Тамарис ханбикә лә уны тыйыуҙар менән буйһондороп торған Ҡаңбабаға шундайыраҡ фекерен әйтә: “Кешенең йөрәге ауырта ул. Һинеке генә ауыртмай, сөнки йөрәгең менән түгел, аҡылыңа таянып ҡына ғүмер итәһең”.

Мин дә китаптар яҙам, ижад азатлығы тигән төшөнсә яғындамын. Яҙған китаптарым әҙәбиәт һөйөүселәргә билдәле. Асылда ғүмеремде шиғриәткә һәм журналистикаға бағышланым. Педагог булдым. Ләкин шиғриәт — тормошомдоң иң етди йылдарының хакимы.

Ләкин йәшәргә, кешеләр, заман ыңғайына көн күрергә лә кәрәк булыу сәбәпле, тамаҡ яллыҡ эшмәкәрлек тә кәрәк ине. Шуға ла республика матбуғаттары өсөн дә мәҡәләләр яҙҙым. Тәржемә эше менән шөғөлләндем. Республика театрҙары өсөн донъя, урындағы драматургтарҙың пьесаларын йә руссанан башҡортсаға, йә башҡортсанан руссаға тәржемә иттем. Ҡамил Йыһаншиндың “Скитники”, “Золото Алдана” тигән романдарын, “Росомаха” повесын тәржемә итеүгә күп көс һалдым. Тәржемә — әҙер әҫәрҙе талап ителгән телгә ауҙарып сығыу ғына түгел ул. Тәржемә — әҫәрҙе теге йәки был тел яңғырашына яраҡлаштырып, автор үҙ телендә яҙғанды тәржемә телендә яңынан яҙып сығыу. Тәржемәлек эшмәкәрлегем өсөн Бөтә Рәсәй әҙәби премияһына лайыҡ булдым. Оялмай әйтә алам, рус һәм башҡорт телдәренә ғашиҡлығым арҡаһында мин был ике тел үҙенсәлектәре араһында яҡшы “йөҙәм”. Тәржемәне намыҫлы башҡарам.

Ә төп йәшәү ҡиблам, шулай ҙа, шиғриәт булды. Шиғыр минең кәсебем генә түгел, яҙмышым да ине. Әле бына, олоғайған, ярайһы аҡыл ултырған көндәремдә, уйҙар, иҫтәлектәргә сумып, яҙмышыма — баһа, яңылыштарым өсөн аҡлау һәм сәбәптәр эҙләйем. Башҡорт тигән, асылда художестволы фекер даирәһенә көйләнгән менталитетлы милләткә минең уй-кисерештәрем, донъяны үҙемсә ҡабул итмешем кәрәк инеме икән? Хоҙай тарафынан талант менән тыуҙырылғайныммы мин? Әллә әҙәбиәттең тәғәйенләнешен аңламаған көйөмә, әҙәби образдарҙың ҡиммәте һәм асылынан алыҫ, әммә тойғоларҙан азат булмаған халҡымдың күңел киңлегенән рухи дивиденд яулап йәшәнемме?

Ғүмеремде, йәшәйешемде, мораль көстө тик үҙемдең эске рухымдан эҙләнем. Ҡотҡарыусым, ерҙә йәшәйешемде аҡлаусы тәғәйенләнешем — шағирлығымдыр, тип уйланым. Мин рухани ҙа, суфый ҙа, дәрүиш тә түгел. Әммә... дөрөҫ йәшәмәгән кеүекмен... Ниндәй бурыс менән тыуҙырылғайным һуң мин ергә?

Шулай ҙа бер ни тиклем үҙ ижад лабораторияМ хаҡында ла һөйләгем килә.

...Шиғырҙарҙы 13 йәшемдә, сөгөлдөр баҫыуындағы аяуһыҙ ауыр эш ваҡытында яҙырға йөрьәт итеүем хаҡында әйткәйнем инде. Ул саҡ "Башҡортостан пионеры" гәзите "Гүзәл минең тыуған илем" тигән темаға конкурс иғлан итеп, минең шул темаға яҙылған тәүге шиғырым конкурста призлы урын яулағайны. Шиғыр сығарыу ул саҡ минең өсөн үҙемде һынау кеүегерәк шөғөл ғәләмәте генә ине, әлбиттә. Тора-бара шиғриәт стихияһына индем дә сумдым. Был донъя шул тиклем арбаны, шул стихия эсенән туған телем мөмкинлектәре аша гармония эҙләүҙән ләззәт һәм кинәнес кисереү халәтенә ингәндән-инә барҙым. Аҙаҡ килеп, шул хаос, стихия эсенән гармония эҙләү әсирлегенә бирелдем. Минең уйлауымса, донъяла ғәҙеллек бик аҙ, бәхетле кешеләр ҙә күп түгел, әммә шиғриәттең төп айҡар даирәһе булған ана шул ғәҙелһеҙлек, йыш осраған бәхетһеҙлектең тамырҙарын ер ҡанундары шарттарына күрә эҙләү, уның кешелек донъяһынан алыҫлаша барыуы хаҡындағы һағыш, жанрҙың төп принцибы булмаһа ла, уйланыу һәм хисләнеү даирәһе кеүек тоҫмалланды. Шиғыр яҙайым әле тип, өҫтәл артына барып ултырғаным юҡ. Образдар бүтән бер шөғөл менән булашҡан сағымда уйыма инеп, күңелемде биләй. Мин эсемдән генә образды, тема һәм идеяны сарларға тотонам. Шунда уҡ рифмалаштырам һәм ятлай барам. Әммә уны эстән генә формалаштырып та, камиллаштырып та бөтөп булмай. Шуға ла ҡағыҙ, ҡәләмгә тотонам. Образдар тел осонда ла, зиһендә лә әйләнеп-тулғаныуына ҡарамаҫтан, уларҙы ҡағыҙға төшөрөргә тотонһаң, икенсе форма ала башлай. Шиғырҙың эске музыкаһы форма менән йөкмәткегә йүнәлеш бирергә тотона. Ҡат-ҡат сарлайым мин строфаларҙы. Фекерҙе тамамланған әҫәр дәрәжәһенә еткерергә кәрәк. Тимәк, образдар — темаға, тема образдарға йоғонто яһай. Рифмаларҙы алдан әҙерләмәйем. Шиғырҙы яҙыу барышында эҙләнәм. Ҡаралама кеше танымаҫлыҡ булып килеп сыға. Уны таҙа ҡағыҙға күсерәм. Күсергәндә ул йәнә редакторлана бара. Тамамланған әҫәр килеп тыуған кеүек булғас, уны төнгөлөккә "йоҡларға" һалам. Иртәнсәген йәнә лә, һәләтемә күрә, әлбиттә, камиллаштырырға тотонам. Шунан ҡысҡырып уҡып ҡарайым. Һәр шиғырымды айырым блокнотҡа күсереп, аҫтына датаһын яҙып ҡуям. Тәүгеләренән алып бөгөнгәсә яҙылған шиғырҙарымдың блокноттарын һаҡлап киләм. Ул ҡулъяҙма китаптарҙың һәр береһенең үҙ исеме бар. Стәрлетамаҡ педагогия институтында туплай башлаған көрән тышлы дөйөм дәфтәрҙең исеме "Алһыу аҡсарлаҡ". Ә 1980 йылда донъя күргән тәүге китабым "Осрашырбыҙ әле" тип исемләнде. Ул китапҡа ана шул "Алһыу аҡсарлаҡ"тағы шиғырҙар инеп китте лә инде.

1980 йылда донъя күргән тәүге шиғырҙар китабымдың "тәүрихы" үҙе бер ҡыҙыҡ ваҡиға булды. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтында уҡып йөрөгән сағымда Муса Ғәли ағайҙан хат килеп төштө: "Мин һиңә "Ағиҙел" журналының 1976 йылдың 11 һанында баҫылып сыҡҡан шиғырҙарыңдан алған тәьҫораттарым хаҡында Монголия Халыҡ республикаһында сәйәхәтем ваҡытында хат ебәргәйнем инде. Әле бына шиғырҙарыңды китап итеп сығарыу хаҡында уйланып йөрөүем. Тиҙ арала бар булған шиғырҙарыңды өс экземплярҙа машинкала баҫтырып, почта аша Башҡортостан Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһы исеменә ебәр. Һин шағир булмаҡсыһың".

Нисек инде? Китап Толстой, Драйзер, Гёте, Манн йә мәктәп дәреслектәренән уҡыған Баязит Бикбай, Сәғит Агиш, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Туҡайҙыҡы ғына була алалыр ҙа инде. Мин нисек китапҡа дәғүә итәйем, ти? Шиғырҙар яҙам, эйе. Шиғырҙарым китап тиклем китап өсөн түгел, ни бары кисергәндәремде ҡағыҙға төшөрөү ниәтенән яҙыла.

Муса ағайға шул фекерҙәремде аңлатырға маташып яуап бирәм. Институттың IV курсында уҡып йөрөгән мәлем. Эйе, юғарыраҡ курста уҡыған Рәмзилә Хисаметдинова шиғырҙар китабын V курста уҡығанда уҡ ҡулына алғайны ла... Рәмзилә Рәмзилә бит инде ул. Ҡәм тигәндә, мин мәктәп, институт программалары буйынса әҫәрҙәрен уҡып һоҡланған Агния Барто, Ольга Фокина, Римма Ҡазакова, Ҡәтибә Ҡинйәбулатова, Әнисә Таһироваларҙан кәм түгел кеүек күренә миңә уның ижады. Ә мин?

Муса Ғәлиҙән түгел, Рәми Ғарипов ағайҙан хат килеп төштө: “Муса ағайың менән мин әйткәс, һүҙебеҙҙе тыңла. Ҡулъяҙма китабыңды шиғриәт секцияһында тикшереүгә әҙерлә!” Икеһен дә ул саҡ бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ. Улар иһә минең хаҡта республика матбуғатына йөрьәт итеп ебәргән һәм донъя күргән шәлкемдәрем аша ғына белә. Хәҙер аңлайым: баһа биреп кенә лә ҡалмай, киләсәктә Башҡортостан тигән ғәзиз ватаныбыҙҙың мәҙәни күген “яҡтыртасаҡ ижадсы” булырыма ышанғандар. Ә мин, халҡыбыҙ алдында танылыу яулаған ике ижадсының үтә лә яуаплы әҙәбиәт ҡамытын муйыныма кейҙерергә яҫҡыныуҙарын бөтөнләй аңлап бөтмәһәм дә, бәләкәй генә аҡылым һәм интуициям ҡолағыма шыбырлаған яуаплылыҡтан ҡурҡам. Ҡурҡам һәм вәссәләм. Мин һәм башҡорт шиғриәтеме?! Туҙға яҙмағанды... Шиғыр сүрәтенә еткерергә тырышып сыймаҡлағандарым китап булып сығырға хоҡуҡлымы икән ни? Миңә өмөт бағлап хат яҙалар. Их... Үҙҙәре менән башта бер осрашып һөйләшеп ал ине лә... Ҡайҙа ул, Өфө тигән ҡаланы бер ҙә күргән юҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тәүге шиғырҙар китабымдың ҡулъяҙмаһын Рәми Ғариповты ерләрҙән бер көн алда тикшерҙеләр. Ҡим Әхмәтйәнов ағайҙың рецензияһын уҡынылар. Төрлө фекерҙәр әйтелде.

Хәҙер мин — ете поэма авторы. Аҙмы был, күпме? Әҙәбиәт күҙлегенән ҡараһаң — аҙ, уҡыусы күҙлегенән — күп. Поэманы яҙыу ҙа, уҡыу ҙа еңел түгел. Бигерәк тә университеттарҙың филология факультеттары студенттары өсөн. Уның символдар системаһын, эске образдар һәм метафораларҙың сөңгөлдәге мәғәнәһен, автор күтәргән теманың ниндәй саралар менән асылыуын, авторға ғына хас ритм, рифмаларҙы, ул ғына ҡулланған фекер һәм эмоциялар динамикаһын барлап сығырға, өҫтә ятҡан мәғәнәнән тыш, шиғыр һәм поэма жанрына ғына хас тәрәндәге кинәйәне барлап сығырға кәрәк. Ә ябай уҡыусы поэма аша эстетик зауығын ҡандырырлыҡ хис-тойғолар кисерешен, аҙмы-күпме мәғлүмәт эҙләй. Уны тик һирәктәр генә уҡый, һирәктәр генә айышына төшөнөргә һәләтле. Сөнки поэма, күңел хеҙмәтенән тыш, зиһен хеҙмәтен дә талап итә, уҡыусының художестволы фекере һәм фантазияһын сарлай. Хәйер, был уҡыусы өсөн генә түгел, ижадсының үҙе өсөн дә шундай уҡ етди хеҙмәт.

Поэманың темаһы табылғас, мин ул хаҡта оҙаҡ, бик оҙаҡ уйланам. Ниәтемде кешеләргә һөйләйем. Әйтәләр бит, ир-ат уйлап һөйләй, ҡатын-ҡыҙ һөйләгәндә уйлай, тип. Ысын, күрәһең, ниәтемде кемгәлер һөйләгәндә, мин фекеремде сарлайым. “Идеяңды сәлдереп ҡуйыуҙары бар”, — тип кәңәш биреүселәр ҙә булды. Ләкин, иманым камил, мин әйтергә теләгәнде мин үҙем генә һәм үҙемсә генә ижад итә алам. Һәр ижадсы — айырым бер планета, уның күңеле лә, аңы ла, күңеле туҡымаһындағы ҡануундары һәм системаһы, структураһы ла тик уныҡы ғына.

Тема аңымда форма алғас, өҫтәл артына ултырам. Башта бигүк көсөргәнеш талап итмәгән бүлектәрҙе яҙам. Бер бүлек — икенсеһен, унан өсөнсөһөн “һөйрәй” башлай. Поэмаларым башлыса фекер сюжетына ҡорола, ситуациялар сюжеты әйтә торған фекергә ярҙам ролен генә үтәй.

Фекер аныҡ, шул уҡ ваҡытта шиғриәтле булһын өсөн баштараҡ ҡағыҙға төшөрөлгән бүлектәр төҙәтеүҙе, тикшереүҙе талап итә. Уларҙы яңынан күсереп, дөйөм туҡымаға тәбиғиләштереп яраҡлаштырырға тура килә. Эш оҙаҡ дауам итмәй,

ай—ай ярым самаһы. Иң ҡыҙығы шунда — өҫтәл, ҡағыҙ ижадсынан өр-яңы образдар, фекерҙәр һәм форма талап итеүгә һәләтле. Был феномен минең үҙем өсөн дә сер. Уйыңда яралған менән ҡулың башҡарғандың араһында йыш ҡына танымаҫлыҡ үҙгәрештәр ята. Ә һин ана шуларға буйһонорға мәжбүрһең.

Мәҡәләләрҙе лә, поэма яҙғандағы кеүек, оҙаҡ уйлағандан һуң йәһәт кенә ҡағыҙға төшөрә башлайым. Яҙа башлап ташлап ҡуйған материал минең архивымда юҡ. Нимәлер яҙа башлап та, уйлағанымды тормошҡа ашырмай, моратыма өлгәшмәй тороп, өҫтәл артынан тормайым тиерлек. Яҙып бөткәс, әлбиттә, ҡат-ҡат редакторларға тура килә. Әлеге эссе жанрындағы әҫәрҙе оҙаҡ яҙырға тура килде. Сөнки бер көн яҙып ҡуйған фекерҙәр иртәгәһенә оҡшамаҫ булды, уларҙы юйырға, әҫәргә яңы йүнәлеш бирергә мәжбүр инем.

Мин Баймаҡ районының Талҡаҫ күлендә урынлашҡан Ял йортонда уҙғарылған дрматургтар семинарҙарында ҡатнашып алдым. Уны драматург Наил Ғәйетбаев ойоштора ине. Ғөмүмән, театр, сәхнә һәммә кешене лә үҙенә ылыҡтыра торған тамаша ул. Театр тарихы әҙәбиәт тарихынан да оҙонораҡ, антик осорҙарҙан бирле йәшәп килә. Мин дә театр яратам. Шуға ла пьеса яҙырға дәрт иттем. “Тамарис” исемле трагедиямды ҡулыма тотоп, семинарға барырға йөрьәт иткәйнем. Әммә... Был семинарҙа мин драматургияның ниндәй жанр икәнлегенә төшөндөм һәм уны бер нисек тә үҙләштерә алмаҫымды аңланым. Драматургия — консерватив жанр. Уға булған талаптар антик замананан бирле үҙгәрмәй тиерлек. Сәғәт ярым — ике сәғәт тирәһе барған тамаша кеше характерҙарын асырға тейеш. Ә кешенең ысын асылы ҡасан асыла һуң? Дөрөҫ, экстремаль шарттарҙа. Ҡыҫҡаһы, ана шул характер асылһын өсөн драматург геройҙарҙы һынау алдына ҡуя. Интригалар шартына индерә. Ана шул һынау, проблеманы хәл итеү барышында кемдең кемлеге асыҡланырға тейеш. Ябайлаштырып һөйләнем. Наил Ғәйетбайҙың “Пьеса нисек яҙыла?” тигән китабында был талаптарға асыҡ һәм аныҡ яуаптар табырға мөмкин. Ләкин жанр үҙенсәлектәрен төшөнөү жанрҙы үҙләштереү тигәнде аңлатмай шул. Мин, мәҫәлән, быға өлгәшә алманым... Таңсулпан Ғарипова, Айҙар Хөсәйенов, Салауат Әбүзәр, йәнә бер нисә кеше был уҡыуҙарҙан фәһем ала алды һәм уларҙың әҫәрҙәре Башҡортостан театрҙары сәхнәләренә күтәрелде. Ә минең быға һәләтем булмай сыҡты. Хыял менән ысынбарлыҡ ҡауыша һалып бармай шул... Миңә, Грибоедов кеүек, бер пьеса авторы булыу менән сикләнергә тура килде. Ершов та Рәсәй әҙәбиәте тарихына “Ҡонек-горбунок” тигән шиғри әкиәте менән генә инеп киткән. “Ҡонек-горбунок”ты уҡымаған, “Горе от ума”ны ҡарамаған кеше юҡтыр. Был әҫәрҙәр берәү, әммә берәгәйле. Минең “Тамарис” исемле трагедияма Сибай театрынан башҡа мөрәжәғәт итеүсе булманы. Шуға ла драматургия хаҡында яҙып тормайым. Тәжрибәм юҡ.

Мин башҡорт шиғриәтен ярайһы яҡшы беләм. Кемдең нимәгә һәләтле булыуы ла миңә билдәле. Яратҡан шағирҙарымдың бигерәк тә лирик шиғырҙарына һоҡланам. Лирика яҙғанда шағирҙың күңел донъяһы, һәләте, шағирәнә маһирлығы нығыраҡ асыла, тип уйлайым. Дөрөҫ, башҡорттар күберәген милләт, тел, ил хаҡында яҙылған шиғырҙарҙы нығ ярата. Был халҡыбыҙҙың ватансылыҡ тойғоһоноң тәрән булыуына бәйле. Рус шиғриәтендә лә публицистик шиғриәт тулып ята. Нәҡ шундай шағирҙар беҙҙә лә, Рәсәйҙә лә шәп шағир тип һанала. Бәхәсләшәһе түгел, шағир иле, теле, милләте яҙмышының һағында тороусы булыуы менән бүтән һөнәр кешеләренән айырыла ла. Юҡ, бүтән һөнәр кешеләре лә патриот ул, шулай булмаһа, нәҡ шундай шиғырҙар үтемле булыр инеме ни? Ә лирика иһә... Ул, минеңсә, милләттең художестволы һәм фәлсәфәле фекере нескәлектәренең юғарылығы.

Күрҙем һинең матур күҙҙәреңдә,
Мөлдөрәмә тулы яҡтылыҡ;
Эй балҡыһын ине шул яҡтылыҡ,
Ҡалһам да мин ете ят булып.
*(Рәшит Шәкур).*

Һөйөү тураһында ҡысҡырмайҙар,
Ҡараштарҙан ғына уҡыйҙар,
Уны ебәк ептән туҡымайҙар,
Йөрәк ебе менән туҡыйҙар.
*(Ҡәҙим Аралбай).*

Һүнһә һүнһен ҡарҙар!
Ҡара ана,
Ярыша-ярыша ҡабына меңдәре...
Ҡулдарыңда һинең ынйы булып,
Яңынан балҡый төҫһөҙ көндәрем.
*(Раил Бикбаев).*

Ебәк кеүек алһыу еләк
Ирендәрҙе үпкәнемдә,
Шул еләктең һуты, тим мин,
Ирен генә сылатырлыҡ,
Ирен генә сылатырлыҡ —
Ғүмер буйы илатырлыҡ.
*(Хисмәт Юлдашев).*

Аяғыңды йыуа зәңгәр тулҡын,
Нишләп тулҡын түгел ҡулдарым?
Юл да бөттө, беҙ ҙә килеп еттек,
Нишләп оҙон түгел юлдарым?
*(Рәми Ғарипов).*

Моңһоу шәфәҡ булып таңдарымда
Ҡалды инде, ҡалды ул усаҡ.
... Таңдарҙы һин йоҡлап ҡаршылама,
Таңдар ҙа бит беҙҙән ҡаласаҡ.
*(Хәсән Назар).*

Һайлап алып бүләк иткәйнең һин
Яҡты төндә йондоҙ сәйләнен.
Көнәлдәге уның балҡышын мин
Йондоҙло шәл итеп бәйләнем.
*(Фәкиһә Туғыҙбаева).*

Был юлдарҙы мин яттан яҙып ултырам. Көнәлемә һарылған шиғыр юлдары байтаҡ. Бындай антология һәр кемдең дә көнәлендә йөрөйҙөр, моғайын. Уларҙы ят-

лап ултырмайһың, шиғри юлдар үҙенән-үҙе йәнгә һеңә лә шунда йәшәп алып китә. Бала саҡта ятлаған доғалар кеүек, ул доғалар ҙа бит ғүмер буйы йөрәгең һәм аңыңда йәшәй.

Ғүмере эсендә әҙәм балаһы ниндәй генә хәлдәргә тарымай ҙа ниндәй генә ғибрәттәр, хәсрәттәр, бәхет-шатлыҡтар кисермәй. Тормош юлымда осраған ҡайһы бер кешеләр яҙмыштарының роман итеп яҙырлыҡ хәл-ваҡиғаларға бай булыуын һөйләгәне бар. Эйе, һәр кемдең яҙмышы китапҡа торошло инде ул. Мин дә үҙемдең күргән-белгәндәремде, шиғырҙарға, хикәйәләргә һыйып бөтмәгән уй-хистәремде ошо эссе жанрында яҙып ҡалдырғым килде. Ҡайҙалыр уҡығайным, бер крәҫтиән көндәлектәр алып барған. Яҙмаларын өйөнөң ҡыйығы башынан табып алғандар. Ул йылдың һауа шарттары, ниндәй иген, йәшелсәнең нисәһендә сәселеүе, ниндәй уңыш биреүе хаҡында яҙа барған. Һауа температураһын теркәгән. Торғаны бер тарих, хатта замана хаҡында белешмә материал килгән дә сыҡҡан. Мин дә шуның кеүегерәк көндәлектәр алып барҙым, улар ҡайһы бер ваҡиғаларҙы онотмаҫҡа ярҙам итә. Ошо әҫәремде яҙғанда ла уларға күҙ һалып алырға тура килде.

Әҙәм балаһы яңғыҙ йәшәй алмай. Уның яҙмышы ил яҙмышына бәйле. Өлөшөмә тейгән ваҡиғаларҙан азат йәшәмәнем. Уларға үҙ манарам бейеклегенән булһа ла мөнәсәбәтемде белдерҙем. Ҙур асыштар, халыҡ яҙмышына йоғонто яһарлыҡ батырлыҡтар эшләй алмаһам да, яҙғандарым кешеләргә аңлашылыр, тигән өмөттәмен.

Ошо яҙмаларым аша ижадыма мөнәсәбәтен белдергән, әҙәбиәт тип ҡабул иткән кешеләргә лә рәхмәт әйткем килә. Мостай Кәрим, Муса Ғәли, Ғайса Хөсәйенов, Ғилемдар Рамазанов, Әнғәм Хәбиров, Рәшит Шәкүр, Рафаэль Аҙнағолов, Фәнил Ҡүзбәков, Флүр Сибәғәтуллин, Фәнзил Санъяров, Ринат Ҡамал, Лариса Абдуллина, Зөлфиә Ханнанова, Тәлғәт Шаһманов, Алла Докучаева, Ирина Николенко, Илүсә Ҡапкаева, Светлана Чураева, Эдуард Таһиров, Галина Салиховалар Башҡортостан матбуғатында ижадым хаҡында ыңғай фекерҙәрен әйтте. Наталия Санникова, Франгизә Илбәкова, Рәйсә Абдуллина, Шамил Кучуков, Фәрзәнә Аҡбулатовалар радио, телевидение тапшырыуҙары ойоштороҙо. Улар мине ҡанатландырҙы. “Бәйләнештә” селтәрендәге дуҫтарым хаҡында ла оҙаҡ һөйләй алыр инем. Ҡаҙаҡ, сыуаш, татар, рус, төрөк, ҡалмыҡ, монгол, инглиз милләтле кешеләр менән аралашыуыма ла бик шатланам. Фекерҙәшлек үҙе үк ыңғай эмоциялар тыуҙыра бит. Ғүмер буйы кешеләр менән аралашып өйрәнгәс, интернеттағы дуҫтарым, редакцияларҙа эшләгән рухташтарым һәм йәш ҡәләмдәштәрем булмаһа, бигерәк ауыр булыр ине.

Ижад илһамы ижадсыны гел генә ҡамалап тормай. Берсә килеп ябырыла, берсә ташлап китеп һағындыра. Ундай саҡтарҙа уйҙан бер ҡасан да азат булмаған зиһен хәтирәләрен барларға тотонам. Шатлыҡ кисергән мәлдәр ҙә, хәсрәтле минуттар ҙа иҫкә төшә. Әнейем менән атайым, туғандарым менән бергә булған саҡтарымды һағынам. Ҡыҙымдың бәләкәй, үҫмер сағын иҫемә төшөрөп уйланам. Уның менән Ҡара диңгеҙ буйына ял итергә барғаныбыҙҙы, поезд менән ҡайтҡанда юл буйы йырлап ҡайтыуыбыҙҙы, уның уңыштарына ғорурланыуҙарымды иҫләп йыуанам. Ейәнем Искәндәрҙе лә һағынам. Уның менән өҙлөкһөҙ уйнауҙарыбыҙ, саңғы, сана, конькиҙа шыуыуҙарыбыҙ, компьютерҙы үҙләштереүҙәребеҙ бер ваҡыт ҡына булған икән.

Тамамлайым. Тере кешенең уйҙарының аҙағы булмай. Әйтергә теләгәндәремде, хәлдән һәм һәләттән килгәнсә, бүтән жанрҙар аша әйтермен, ғүмер булһа.

*2012—2015 йылдар.*